Әхмәт СӨЛӘЙМӘНОВ

# МӘҢГЕЛЕК ТУҢЛЫҠТАҒЫ ЙЫЛЫЛЫҠ

### 5. Фәлән ерҙә алтын бар, ти...

Ҡунаҡ аҙ ултырыр – күп һынар, тигән боронғолар... Шуның һымаҡ, Саха сирендә бер аҙналай ғына булыныльһа ла, байтаҡ нәмә белеп ҡайтылынды. Тегенеһе, быныһы менән һөйләшеүҙән, үҙем күргәндән мин шуға төшөндөм. Әүәл әүәлдән бында, фәнгә һәм ғалимдарға Мәскәү ҡасан рәхимле ҡарашын ташлар икән, тип көтөп ятмайҙар икән. Әкиәттең бер аҡыллы геройының, ишеткәнде һөйләһәм, яҙыҡ булыр, күргәнде һөйләйем, тигәне кеүек булһын әле, тим мин дә. Шуға ла, оҙонғараҡ һуҙынҡырап булһа ла, тәфсирләп бәйән итмәксемен.

Суверенитет алғас та, үтә ирәйеп, эйфорияға бирелеп, ойоп китмәй,

Форсатың – бер сағың,
Килмәҫтер һәр саҡ ул,
Сосайып, тотмаһаң,
Ыҫҡыныр борсаҡ ул

тигән принцип буйынса, етеҙ ҡуҙғалып, тиҙ эшкә тотона сахалар. Иң әүәл милли кадрҙарҙы үҫтереүгә иғтибар бүлә етәкселәр. Сөнки, Сталин үҙе иҫкерһә лә, уның “Бөтәһен дә кадрҙар хәл итә“ тигәне иҫкермәүен хәтерҙәренә нык һеңдергән улар. Беҙҙән айырмалы рәүештә, улар уҡырға сит илдәргә, Англияға, Америка Ҡушма Штаттарына, Төркиәгә, берәмләп һәм урыҡ-һурыҡ түгел, ә йөҙәрләп-йөҙәрләп ебәрә икән саха сығышлы йәштәрҙе. Рәсәйҙең үҙәк вуздарында ла күп уҡый имеш улар. Ә республиканың үҙендәге профессиональ урта һәм юғары уҡыу йорттары хаҡында әйтеп тораһы ла юҡ. Уҡыу йорттарына ингәндә төпкөлдәрҙән килгән йәштәр өҫтөнлөк менән файҙалана икән. Быға ышаныу өсөн төштән һуң Якутск урамдарына бер сығып әйләнеүең дә етә. Үҙебеҙсә әйткәндә, ҡара сәүкәмени! Урам тулып саха йәштәре йөрөй. Кисен майҙандарға сығып ура, урамдарға күҙ һал – йәнә улар. Бында урам тулып теләнселәп ултырыусылар юҡ. Ә беҙҙә, тажик сәкмәне кейеп, кем генә теләнселәп йөрөмәй. Баҙарға барһаң да, трамвай, автобустарҙа ла, троллейбусында ла – бөтә ерҙе Урта Азиянығылар ҙа тау халҡы баҫып алған. Коммерция автобустарының рулен дә уларға бирә башланыҡ. Инде идара итеү рулен тоттораһы ғына ҡалды. Шунан хайран ҡалабыҙ ҙа, наркомандар күбәйә, СПИД тарала, башҡа венерик сирҙәр үрсей, тип яр һалабыҙ. Үтә киң күңелле булһаҡ, бестәтәү ҙә ҡалырбыҙ әле. Баш ҡалабыҙҙың иң үҙәк урамында, Дәүләт циркы менән “Искра“ кинотеатрының ике араһына баҫҡан бестәтәү ҡурайсының бронза һыны көнәлгәре шуны һынландырып тормағайы.

Мин был яҙмаларҙы әҙерләгән арала “Ағиҙел“ журналы Рауил Бикбаевтың “Ҡитғалар аша“ тигән юлъяҙмаларын баҫып өлгөрҙө. “Диалог Евразия“ журналы сыға башлау уңайы менән Төркиәгә ҡабаттан сәфәр ҡылыуы хаҡында яҙған халыҡ шағирын да борсой икән был мәсьәлә. Бына ул ни ти: “Ерҙәрен баҫып алыуға ҡаршы күпме тапҡырҙар яуға күтәрелгәндә лә, башҡорт башҡаларға ҡарата нәфрәт һаҡламаған, үҙ яҙмышын ғына ҡайғыртып, башҡаларҙан айырылып йәшәргә йыйынмаған. Иң ауыр саҡтарҙа ла халҡыбыҙҙың

Аҙағы. Башы 6-сы һанда.

күңеле донъяға асыҡ булып, ҡарашы ихлас булып ҡалған. Башҡорттоң күңеле шулай киң булғанға ла бит, күпме бисаралар беҙгә килеп һыйынған, батша иҙеүенән ҡасҡан татары ла, сыуашы ла, марийы ла, удмурты ла, мордваһы ла беҙҙә үҙенә яңы төйәк тапҡан, ер һәм ирек эҙләгән рус, украин крәҫтиәндәре лә ошонда нигеҙләнгән. Уларҙың барыһы менән дә башҡорт эскерһеҙ аралашып, Туҡай әйтмешләй, “тел, лөғәт вә әхлаҡ алмашып“ йәшәгән. Ошо ҡунаҡсыллығы, сабыйҙарса йомартлығы, аҙаҡҡа табан төрлө заман хакимдарының мәкерле колониаль һәм миграцион сәйәсәте арҡаһында үҙенең ғәзиз төйәгендә аҙсылыҡта тороп ҡалырын, үҙ ерендә башҡаларға ҡайһы саҡта үҙ ихтыяры менән, ә һуңғы замандарҙа көслө ҡыҫым аҫтында, сараһыҙҙан, урын бирә-бирә кешеләренең һаны буйынса үҙ илендә өсөнсө милләткә әйләнерен, шул арҡала нахаҡҡа ғәйеп һүҙҙәре ишетерен башҡорт күҙ алдына ла килтерә алмаған, әлбиттә“. (Бикбаев Р.Т. Ҡитғалар аша: Сәйәхәтнамә//Ағиҙел. – 2001. – №2. — 155-се б.)“. Хаҡ һүҙҙәр, урынлы борсолоу. Республикала һәм, ғөмүмән, Тарихи Башҡортостанда этник баланс күптән боҙолған, тип, ошо мөһим сәйәси, социаль әһәмиәтле демографик проблемаға ҡул һелтәүҙән киләме был? Әллә һаман да киң күңелле (дөрөҫөрәге, хуш күңелле) булыуыбыҙҙанмы? Әллә һаман да, юғарыла яҡшыраҡ белгәләрҙер әле, был мәсьәлә миңә ҡағылмай, тип, йәмәғәтселектең ошо мөһим мәсьәләгә күҙ йомоуынанмы? Әллә һаман да интернационализм менән интервенцияны айыра алмауыбыҙҙанмы?

Өҫтөнлөк(льгота) тигәйнем. Был хәл бер Яҡутстанда ғына түгел, уның күршеләрендә лә күҙәтелә. Ханты-Мансийск ҡалаһынан килгән М.А.Лапина тигән ғалимә үҙенең докладында: “Һуңғы йылдарҙа ханты менән манси халҡының иҫәбе арткандан-арта бара“, – тип, беҙҙе ғәжәпкә ҡалдырғайны.

– Тыуым шул хәтлем көслөмө? Әллә, Ингуш Республикаһындағы һымаҡ, һеҙҙә лә күп никахлылыҡҡа рөхсәт бармы? – тип һорағас, ул:

– Юҡ-юҡ, ундай закон хаҡында һүҙ ҙә сыҡҡаны юҡ, – тине лә былай тип өҫтәп ҡуйҙы: – Ситтән килеүселәр, хатта украиндар, урыҫтар ҙа, ханты йә манси булып яҙыла.

– Ниндәй ихтыяждан сығып улай итәләр һуң улар? Әллә ханты менән манси ҡыҙҙары үҙҙәренә ныҡ ғашиҡ иттерәме уларҙы?

– Ниңә, ханты менән манси ҡыҙҙары башҡаларҙыҡынан бер ҙә кәм түгел! Ана, докладсының үҙенә ҡарағыҙ, – тине кемелер. Докладсыбыҙ:

– Беҙҙең ҡыҙҙарға өйләнеүселәр ҙә бар. Өйләнмәйенсә лә, үҙҙәрен йә ханты, йә манси тип яҙҙырыусылар ҙа бар. Урындағы льготаға өлгәшер өсөн шулай итәләр, – тигәс кенә шау-шыу баҫыла төштө.

Мәскәү яғында көн торошо гел аяҙ булып тормауына бер дәүләт булып йәшәү дәүерендә күп тапҡырҙар тарих шаһит булыуын онотмайҙар икән Саха илендә. Быны ғалимдарға булған мөнәсәбәттә лә күҙәтергә була. Беҙҙәге һымаҡ, уларҙа ла суверенитеттың бер ҡаҙанышы булып Саха(Яҡутстан) Фәндәр академияһы асылған. Әммә беҙҙә Башҡортостан Фәндәр академияһы йә завод, йә тармаҡ янында хасил булған иҫәпһеҙ техник тикшеренеү институттарын үҙенә берләштерҙе. Ә гуманитар фәндәр буйынса бер генә институт та ойошторолманы. Булғанының етәкселәре үҙҙәре, академия өсөн ҡайҙа ҡуш ҡуллап тауыш бирә-бирә, ҡайҙа терһәк менән төртөшә-көрәшә, уның составына инделәр: кеме республикабыҙ тарихында беренсе тапҡыр ойошторолған шул ғилем үҙәгенең ысын ағзаһы(действительный член), кеме – мөхбир-ағзаһы(член-корреспондент) булыуға (хәйер, һуңғыһына ҡайһы бер кафедра, бүлек мөдирҙәре лә) өлгәште. Кемдәрҙер тарафынан тырышып-тырышып мөнйөлгән һөйәккә лә, хуш, тигән теге кем һымаҡ, иҫәпкә бар, һанға юҡ, йәғни академия табағынан ниҙер алып һоғонорға ирке булмаған, бары йыйылыштарҙа тауыш һәм ҡул күтәреү хоҡуғы алған ассоциатив ағзалар үрсетелде. Ә гуманитар йүнәлештәге институттар һәм институт хоҡуғындағы бүлектәр “на всякий случай“ ҡағиҙәһе буйынса Рәсәй Фәндәр академияһының Өфө ғилми үҙәгендә тороп ҡалды. Бер ниндәй ҙә логика юҡ бында. Башҡа фәндәрҙән айырмалы рәүештә, Башҡортостандың

тарихын, мәҙәниәтен, сәнғәтен, башҡорт халҡының телен, әҙәбиәтен, ижадын тик ошонда ғына, Башҡортостанда ғына, өйрәнәләр. Башҡалары буйынса Рәсәйҙең, донъяның теләһә ҡайһы төбәгендә тикшеренергә була. Улар бында бары төйәкләнгән генә (урыҫсалап әйткәндә, пропискала ғына тора). Урындағы академияға уларҙың һис кенә лә мөнәсәбәте булырға тейеш түгел, тип раҫларға йыйынмайым. Алла һаҡлаһын! Гонаһы ни тора! Әммә шуға аҡылым камил — урындағы академияға иң элек ошо урынға кендеге менән береккән ғилми учреждениелар инергә тейеш ине.

Мин, бында бер ниндәй ҙә логика юҡ, тип һүҙ башлағайным. Әйттем дә ҡайттым. Әммә ошо урында:

– Хәйер, һәр кемдең үҙ логикаһы! – тип әйтке килә.

– Вот, вот! – тип әйтер берәй оппонентым, кинәнеп, һуҡ бармағын минең яҡҡа төртә-төртә. Шулай итһә, шулайта торһон. Ә мин һүҙҙе бер хәтирәгә күсерәйем. Бынан бер нисә йыл элек (иҫәпләп сығарыусыға еңелерәк булһын: академик Р.И.Ниғмәтуллинға, Рәсәй Фәндәр академияһының Өфө ғилми үҙәге президиумы рәйесе вазифаһынан тыш, Башҡортостан Фәндәр академияһы президенты бурысын да йөкмәтер алдынан) Тарих, тел һәм әҙәбиәт институтында ла, әлеге ике ғилем үҙәктәренең президиумдарының ултырыштарында ла ҡыҙыу-ҡыҙыу бәхәстәр булып алғайны.

– Ниңә Тарих, тел һәм әҙәбиәт институты Башҡортостан Фәндәр академияһы составында түгел?

Тәүҙә ошо һорау һерәйеп килде лә сыҡты. Уға башта былдай яуап яңғыраны:

– Был институттың йорто, фәләнтөгәне Мәскәү аҡсаһына төҙөлгән. Беҙҙең яңы академияға күсеүебеҙ булыр – иртәгәһенә үк, шуларҙы тотонған, файҙаланған өсөн, аҡсағыҙҙы беҙҙең кеҫәгә ағыҙығыҙ әле, тип әйтәсәктәр.

Карл Маркс урамындағы йәшел йорттағы (ике ғилем үҙәге президиумдары йортонда) һөйләшеүҙә ошо һорау, ошо яуап яңынан яңғырағас, профессор М.С.Ғөбәйҙуллин:

– Юҡ, ул биналар республикабыҙҙың бюджетына төҙөлдө, – тине. Иҡтисад докторының был һүҙенә ҡаршы репликалар ҙа яңғыраманы, уны ҡеүәтләүсе лә булманы. Сөнки һүҙ икенсе юҫыҡҡа күсте. Юридик фәндәр докторы, профессор Ф.М.Раянов:

– Башҡортостан Фәндәр академияһы асылыу, уға инеү, ҡайһы берәүҙәр әйткәнсә, Рәсәйҙән айырылыу, Рәсәй Фәндәр академияһынан айырылыуҙы аңлатмай бит әле. Элек союздаш республикаларҙың фәндәр академиялары ниндәй хоҡуҡта СССР Фәндәр академияһы составында булған, Башҡортостан Фәндәр академияһы Рәсәй Фәндәр академияһы составында шундай хоҡуҡта булырға тейеш, – тине.

Был мәсьәлә Тарих, тел һәм әҙәбиәт институтындағы һөйләшеүҙә ҡуйыртылған саҡта ҡалҡып-ҡалҡып ҡуйғайны, әммә ул саҡта ла, әле лә уға төплө яуап биреүсе табылманы. Әйтерһең, Раянов иптәш шуны тыңлап торған. Әммә бары фекерҙәр тап килешенә һөйөнөү менән генә хушһынырға тура килде. Ни өсөн тигәндә, институтта һөйләшеү ваҡытындағы һымаҡ, бында ла ул фекергә иҫтәре китмәне етәкселәрҙең. Хәҙер инде ул һөйләшеүҙәрҙән һуң, әйткәнемсә, байтаҡ һыуҙар аҡты. Шул сәбәптән иптәштәрҙең әйткәнен һүҙмә-һүҙ еткерә лә алмағанмындыр бәлки. Тик шуныһы хаҡ: былдай иҫәпкә бар, һанға юҡ һөйләшеүҙәр, ул саҡтарҙа, асылда, тик торғандан һауа тибрәтеүҙәр әҙ булманы, әммә әле тура телмәр итеп һыҙыҡ өҫтөнә алынған һүҙҙәрҙең йөкмәткеһе дөрөҫ.

Шул һөйләшеүҙәрҙең береһендә мин:

– Беҙҙең институт та Башҡортостан Фәндәр академияһына инмәгәс, ул бары урындағы әһәмиәткә эйә булған академиктар һәм мөхбир-ағзалар үрсетеү өсөн генә асылдымы ни?! – тип ысҡындырғас, хөрмәтле генә бер ағай (ауыр тупрағы еңел булһын, гүре нурлы булһын! Бирәйбә!), Мәскәүгә аренда хаҡын түләү мәсьәләһен дә иҫтә тотоп:

– Башҡортостан суверенитеты ла под вопросом торғанда, иптәштәр, был мәсьәләне күтәрмәү хәйерле. Рәсәй Фәндәр академияһынан китмәйек! – тине. Шунда ултырған башҡа тарихсылар ҙа уны хуплап:

– Ну да! Ну да! – тиештеләр.

– Суверенитет ваҡытлы күренеш булырын белгәс, ниңә һеҙ, йәмғиәт үҫе-

ше законсылығын төптән өйрәнеүсе тарихсы иптәштәр, өнһөҙ ултырҙығыҙ? Ниңә халыҡҡа, был эш зарарлы, ул барып сыҡмаясаҡ, тип аңлатманығыҙ? Ниңә улай булғас беҙ суверенитет тураһында декларация проектының раҫланыуын талап итеп, өс көн буйына өшөпҡатып, Аҡ йорт алдында пикетта торҙоҡ? Һеҙҙеңсә, республиканың суверенитет алыуы – бер башҡорттар өсөн генәме лә, Рәсәйҙән сығып китеүме? Суверенитетыбыҙ алып биргән Фәндәр академияһы составына инеү – Рәсәй Фәндәр академияһынан китеү менән бер ме ни?! Элек союздаш республикаларҙың фәндәр академиялары СССР Фәндәр академияһы составында булды түгелме? – тип әйтергә тура килгәйне миңә. Ошо һөйләшеүҙәрҙә булыусыларҙың ҡайһы берәүһе бөгөн:

– Әйттек бит! – тип яуаплар был юлдарҙы уҡығас оло ҡәнәғәтләнеү менән, суверенитетыбыҙҙың Мәскәү тарафтарынан сикләнеүен күҙ уңында тотоп. Ни хәл итәһең: һәр кемдең үҙ логикаһы... Әммә хәҡиҡәт бар, хәҡиҡәт – бер. Оло Ватаныбыҙ әлегә РИ тип түгел, РФ тип атала. Ә федерацияны үҙен-үҙе тураҡлау һөҙөмтәһендә барлыҡҡа килгән өлкәләр һәм крайҙар түгел, ә СССР-ҙы хасил иткән союздаш республикалар һымаҡ, суверенлы республикалар хасил итә. Шуның һымаҡ, суверенлы республикаларҙың фәндәр академияһы ла әүәлге шул союздаш республикаларҙың фәндәр академиялары хоҡуғында Рәсәй Фәндәр академияһы составында булырға тейеш. Әйткәндәй, ниңә оло академиябыҙ Рәсәйҙеке генә? Рәсәй Федерацияһыныҡы булырға тейеш түгелме. РИ саҡта "Российская Императорская АН" булған, СССР сағында – "Академия наук СССР" ине ләбаһаң!

Ярар уныһы. Киләйек йәнә Саха тарафтарына. Беҙҙән айырмалы рәүештә, сахалар шикләнеп, шөбһәләнеп тормаған: гуманитар фәндәр өлкәһендә тикшеренеүселәрҙең етәкселәре генә түгел, ут күршебеҙ Татарстан Республикаһындағы һымаҡ, тотош институттары менән республика фәндәр академияһына ингән. Беҙҙә үҙ иҫәптәренә саҡырып, үҙ иҫәптәренә ашатып-эсереп, бушлай ҡунаҡханаларҙа тотоп, Мәскәү: "Хакимлыҡ итеү горизонталләшеп киткән, шуны терән торғоҙайым", – тип ятҡанда, олонхо юбилейы, шуға бағышлап халыҡ-ара конференция үткәреп ятыуҙарына ҡарағанда, насар йәшәмәйҙәр.

Сахала фәнгә мөнәсәбәт ниндәй икәненә шул да баҙыҡ миҫал. Әүәлдән ишетә йөрөгәнем – шулай уҡ ике ятып та беҙҙең ғалимдарҙың бер төшөнә кермәҫ яңылыҡ. Беҙҙең өсөн генә яңылыҡ. Саха ғалимдары өсөн, бер шаян йырҙың: "Төшкө тамаҡ, киске тамаҡ. Билдәле бит, Сафура!" – тигәне кеүек, күптән инде ғәҙәти, башҡаса мөмкин булмаған хәл кеүек тойола. Ә нимәне күҙ уңында тотам һуң мин был урында? Шуны күҙ уңында тотам: Саха йөмһүриәтендә кандидатлыҡ диссертацияһы яҡлаусыны республика президенты егерме мең тәңкә менән бүләкләй. Әгәр ки дәртеңдән тыш, дарманың булып, фән докторлығына диссертацияны уңышлы яҡлай алһаң, рәхим ит – һиңә ҡырҡ мең.

Былдай дәрәжәләргә барып етеүсе белә: юкты бар итеп, ҡайҙан етһә шунан өҙөгөңә ялғау таба-таба ғына, барып ирешәһең уға. Спонсорың булмаһа, әлбиттә. Шуға күрә былдай мәрхәмәт һис кенә лә ғалимдың эсен тишмәй: тишеккә мул ғына ямау, өҙөлгәнгә ялғау ғына булып ҡала.

Әле Саха хәлдәрен һөйләп ултырам, ә хәтеремә 1999 йылда Төрөк йөмһүриәтенең Элазиг улусына халыҡ-ара ғилми конгресҡа барғанда бер әзри (әзербайжан) коллегамдан ишеткәнем килеп, минең хаҡта әйтергә онотма әле, тигәндәй булды. Ул егет, Баҡынан килеп, Элазиг университетында уҡытып йөрөй икән. Тәүҙә контракт буйынса эшләгән. Әле, ике ил гражданы тигән хоҡуҡҡа эйә булып, ғаиләһен күсереп алған.

– Ҡатын инде шул совет осоронда ҡабул ителгән күләмдә Әзриҙән пенсия ала, улым бында аспирантурала уҡый, үҙем уҡытам, – тине боронғо СССРҙашым.

– Эш хаҡығыҙ күпме һуң? – тип ҡыҙыҡһындыҡ Ҡырғыҙстандан килгән дуҫ менән икәүләшеп.

– Күпме тип ни – мең доллар инде шунда. Төп уҡыу эшенән тыш, үҙебеҙсә әйтмешләй, почасовик булып, икенсе урында лә дәрес бирәм. Унан тыш "за

отдаленность от центра“ тигән коэффициент та алам. Йәмғеһе ай һайын меңярым доллар була инде, – тине яңы танышым, күҙен дә йоммайынса. Бәлки, шыттыралыр? Кем белһен уныһын. Һәр хәлдә, көтөрләмәҫ ерҙән эсең көтөрләрлек сумма хаҡында һүҙ алып барҙы ул.

Ошо урында келт итеп шул да хәтергә килеп төштө. 2000 йылдың октябрендә “Йәшлек“ гәзитендә “Рухи мираҫты халыҡҡа“ тигән баш аҫтында бер интервью баҫылғайны. Уны республикабыҙ телевидениеһының “Мәңгелек талип“ тигән тапшырыуы буйынса күптәргә таныш Илшат Рәшит улы Насиров биргән ине. Ул күптән инде талип түгел. Медицина институтын, унан Урал дәүләт университетының философия факультетын тамамлап, Хартумда халыҡ-ара университетта, Сәғүд Ғәрәбстанындағы Ислам мәҙәниәте институтында белем алған. Бөгөнгө көндә философия фәндәре кандидаты Илшат Насиров Башҡорт дәүләт университетында ғәрәп теленән дәрестәр бирә. Күп илдәрҙе, ишетмеш буйынса ғына түгел, үҙе йөрөп, үҙе күргән, өйрәнгән кеше булараҡ, ул шулай тигән ине үҙенең интервьюһында: “Ҡыҙғаныսҡа ҡаршы, беҙҙең илдә белгестәр, вуз уҡытыусыларының эше бик түбән баһалана. Сағыштырыу өсөн ҡарағыҙ: Африка уҡытыусыһының бер айлыҡ эш хаҡы – 100 доллар, Сәғүд Ғәрәбстанында фән докторына – 4 мең, ярлы ғына ил һаналһа ла, Суданда уҡытыусыға 100 доллар түләйҙәр. Ә бында фәнгә хеҙмәт итеүсе бәләкәй генә эш хаҡына, етмәһә, торлаҡһыҙ интегеп, йәшәргә (Илшат ҡусты ғәфү итһен, “йәшәргә“ түгел, дөрөҫө – “йән аҫырарға“. – Ә.С.) мәжбүр була“.

“Фәлән ерҙә алтын бар, барһаң – баҡыры ла юҡ“. Был мәҡәлде белмәгән кеше әҙҙер, моғайын. Әйткәнемдән, бәйән иткәнемдән төшөнгәнһегеҙҙер: булғылай икән шул ул. Хатта тура мәғәнәһендә лә. Хатта, алтын бар ҙа алтын бар, тимәгән ерҙә лә. Хикмәт үҙ ереңдән сыҡҡан мәғдәнгә хужа була белеүҙә, унан өлөш ала алыуҙа ғына түгел, алтынға биргеһеҙ аҡылды киләсәк хаҡына эшләтә белеүҙә лә.

**6. Көнләшмәле, сәмләшмәле эштәр**

Конференция көндәрендә байтаҡ олонхоһуттарҙы тыңланылды. Шул сағында көнләшеү тойғоһон саҡ тыйып ултырынылды. Беҙҙә лә ошондай коллективтар ойошторорға була лабаһаң. Юҡмы ни беҙҙә эпостар ҙа, әҙме ни беҙҙә ҡобайыр башҡарыусылар. Саха иле менән таныша торғас, шуныһына ла төшөнөлдө. Бында наслег(ауыл), улус мәҙәниәт һарайҙарында ла, мәктәптәрҙә лә олонхо культы көслө. Уны уҡыусыларҙан да, һуғыш ветеранынан да, туҡһанды ваҡлап барыусы ҡарсыҡ ауыҙынан да ишетеп, һоҡланыу насип булды.

Шуныһы ғәжәп: Сахала эпос(олонхо) традицияһы әле лә тере. Мәғлүм булыуынса, эпостар жанр булараҡ тәүтормош-ырыу ҡоролошо тарҡалып, феодаль мөнәсәбәттәр урынлаша башлаған дәүерҙә хасил була тигән фекер фәндә ныҡ тамыр йәйгән. Әйтерһең, ырыу ҡоролошоноң емерелеүен көтөп кенә торғандар, “Етте, феодализмға күсәбеҙ, иптәштәр! Эпос ижад итә башларға ваҡыт!“ тигән күрһәтмә килгән ҡайҙандыр юғарынан. Ул сағында хәҙер мәғлүм булған мифологик эпостар менән ни эшләргә? Күрәһең, эпик традиция фәндә тамырланыр ҡараштарға ҡарамай, боронораҡ, бик борон заманда тыуа башлаған. Артабан, һүҙ ҙә юҡ, яңы бер эволюция дәүерен кисергән. Әммә эволюция тигәнен, ҡайһы берәүҙәр уйлағанса, камиллашыу, “шымарыу“ дәүере тип кенә күҙалларға ярамай. Сөнки сифат яғынан юғалтыуҙарҙы ла әҙ кисермәгән эпос. Ошо әйтелгәндәр фонында саха эпосы(олонхо) “ҡанунға һыймаҫ күренеш“ булып ҡалған. Башҡа тарафтарҙа эпос ижад итеү ҡан замандарында тороп ҡалған. Бөгөн ҡайҙалыр, ниндәйҙер халыҡ үҙенең эпосы менән ғорурлана ала икән, ул бының өсөн шул әҫәрҙәрҙе быуын-быуын тапшыра килгән сәсәндәргә, манассыларға, ашугтарға, аҡындарға, кобзарҙарға, сказителдәргә бурыслы. Ҡасандыр ижад ителгән сюжеттарҙы быуаттарҙан–быуатҡа, эстафета тапшырған һымаҡ, ана шулар беҙҙең осорға килтереп еткергән. Хәҙер инде беҙҙән, ундай һүҙ һәм моң оҫталарының сәнғәте, яҙма индивидуаль ижад өҫтөнлөк итә башлау һөҙөм-

тәһендә, һүрелә барып, һүнер сиккә еткән дәүер кешеләренән, шул оҫталарҙың изге эшенең, улар һаҡлап килтергән ҡомартҡыларыбыҙҙың бәҫен, ҡәҙерен белеү, һис юғында, хөрмәт йөҙөнән уларҙы теркәп ҡалыу сараһын күреү талап итеlә.

Эпик традиция хаҡында һүҙ йөрөткәндә, башҡа тарафтарҙа, күптән һүнгән усаҡтың көлөн теүештереп, ҡасандыр унда бешерелгән көлсә тәмен тойорға маташҡан бер мәлдә, сахаларҙың эпик ижад усағы әле дөрләп яна. Сахаларға ғына хас тәм-том, башҡа милли ризыҡ тик уларҙың сыуаллы усағында ғына, тик улар ҡулы менән генә бешерелә алған кеүек, олонхо бөгөн дә үҙенең тәү булмышына хас хуш еҫен, аһәңен юғалтмаған. Быны ң үҙ нигеҙе, үҙ сәбәптәре бар.

Сахаларҙың бабалары әллә ҡасан, быуаттар төпкөлөндә үк, әле уларҙың бөгөнгө вариҫтары йәшәгән икһеҙ-сикһеҙ ерҙәргә ереккән дә, башҡа төркиҙәрҙән бөтөнләй тиерлек айырылып, үҙҙәренең рухи хазиналарын тәүбулмышынсараҡ консервациялап алып ҡала алған. Уларҙың олонхоһынан, шуныһы йә быныһы "билдәле сәбәптәр арҡаһында"(?) уртаҡ, тип өлөш дәғүәләүсе лә йә булмаһа һорап та тормай сәлдереүсе лә юҡ.

Башҡорттоң йә бүтән төрки халыҡтарының эпосынан һәм, ғөмүмән, эпик традициянан саха эпосы – олонхо нıҡ айырыла. Унда һүҙ һәр саҡ Урта донъяны үҙләштереүсе, шуның тәүге кешеләре булған баһадирҙар ҡаһарманлығы үҙәк урынды биләй. Ул баһадирҙар *уранхай сахалар* тигән ҡәүемдең бабалары иҫәпләнә. Ә *уранхай* сахалар тигәндә, эпик ҡомартҡылар хәҙерге сахаларҙың боронғо үҙатамаһын күҙ уңында тота икән. Улар, тимәк, уларҙы ҡурсалаусы баһадирҙар, олонхолар аңлатыуынса, улай-былай ғына ҡәүем түгел, ә Күктең үҙенән яралған зат, дөрөҫөрәге, Күктә йәшәүсе *айыы аймағынан* (нәҫеленән) килеп сыҡҡан зат иҫәпләнгән.

Олонхо сюжеты *айыы аймағы* баһадирының ҡаһарманлыҡ биографияһын тасуирлауға ҡорола. Ә инде тематик яҡтан ул сюжеттар өс төркөм хасил итә. Берәүҙәре Урта донъяны *айыы аймағы* нисек үҙләштерә башлай, ана шуны бәйән итә. *Икенсе төркөмгә* ингәндәре – *уранхай саха ырыуҙарының* башлыҡтары тураһында, *өсөнсөләре* шул ҡәүемде ҡурсалаусылар хаҡында һөйләй. Хәҙерге саха фольклорсыларының күренекле бер вәкиле иҫәпләнгән Н.Е.Емельяновтың асыҡлауынса, ана шундай өс тармаҡ хасил итеп, олонхолар яҡуттарҙа ырыу ҡоролошо хасил булыуын, уның тарҡалыуын бөтә ҡаршылыҡтарында күрһәтеп, ырыусылыҡ аңын сағылдыра. Шуға ла ул әле лә ырыу эпосы булып ҡала. Социаль мотивтар уларҙа сала-сарпы ғына бирелә. Шунлыҡтан улар эпик сюжетта хәл иткес роль уйнамай.

Бөгөнгө көндә, бигерәк тә суверенитет шарттарында, Саха илендә олонхоға иғтибар айырыуса артҡаны күҙәтелә. *Беренсенән*, боронғо эпик әҫәрҙәрҙе башҡарыу мәктәптәре тергеҙелә. Әле лә унда аҙналар буйы һөйләп, көйләп бөткөһөҙ олонхолар бар икән. Шундай йылға буйы әҫәрҙәрҙе башҡарыу оҫталары – *олонхоһуттар ҙа* күп.

*Икенсенән*, олонхоһуттарҙың шундайҙары ла осрай тора: улары йә боронғо эпик сюжет буйынса йә бөтөнләй икенсе темаларға үҙҙәре лә олонхо ижад итә. Үтеп киткән егерменсе быуаттың алтмышынсы йылдарында саха фольклорсылары Роман Петрович Алексеев тигән олонхоһуттан 50 000 шиғри юлдан торған "Алаатыр Алатойон" тигән олонхо яҙып алған. Был эпос өс өлөштән тороп, батырҙарҙың өс быуыны башынан үткән хәлдәрҙе бәйән итә. Уны ижад иткәндә олонхоһут, теге ваҡыт термины менән әйткәндә, "ғаилә подряды" ысулын ҡулланған: уға ҡыҙы, ейән-ейәнсәрҙәре, ағай-энеһенең бала-сағаһы булышҡан. Лена ярында урынлашҡан асыҡ музейға барғанда, был һүҙ оҫтаһының том-том йыйынтыҡтарға һыйғыһыҙ яҙмаларын (ә уларҙы, әйткәнемсә, күмәкләшеп күсергәндәр) үҙемә лә тотоп, битләп ҡарарға насип булды (конференция ҡунаҡтары килеү уңайы менән унда төрлө күргәҙмәләр, шул иҫәптән олонхоһуттарҙың ҡулъяҙмаларынан да экспозиция асҡандар ине). Алексеевтың "ғаилә подряды" әҙерләгән дәфтәр-дәфтәр ҡулъяҙмаларҙа, олонхонан тыш, йырҙар, легенда, риүәйәттәр ҙә теркәлгән ине. Бер урынға йыйылһалар, саха-



*Олонхоһут менән*

лар милли байрамдары *Ысыах* ваҡытында *абырзах* (тиҙәйткестәр) әйтешеү бәйгеһен үткәрергә әүәҫтәр икән. Алексеевтар шундай тиҙәйткестәрҙе лә күп яҙып алған. Уларҙың да күптәрен Роман Петрович үҙе, йә "ғаилә подряды" менән ижад иткән.

– Был хәтле байлыҡтың китап булып баҫылғаны бармы? Бәлки урыҫ теленә тәржемә ителгәндер? – тип һораныҡ беҙ.

– Юҡ шул. Әлегә бына илле йыл инде был ҡулъяҙмалар хәрәкәтһеҙ ята, – тине күргәҙмәгә аңлатма биреүсе ханым.

Профессиональ шағирҙар рәтенә дәғүә итмәйенсә генә, Саха илендә элек-электән киң билдәле булған һәм үҙ улусында дан алған, унан тышта һан алған Р.П.Алексеев тибындағы олонхоһуттар күп булған. Үткән быуатта Э.К.Пекарский тигән мәғрифәтсе фольклорсының үтенесе буйынса "Өлбөт Бэргэн" ("Үлмәҫ Мәргән") тигән олонхоны яҙҙырған Николай Тихонович Абрамов (әйткәндәй, әсәһе яғынан олатаһы булған А.П.Аржаков Сәһән(Сэсэн) тигән ҡушамат йөрөткән) үҙ ҡулы менән уға "Нюргун Боотур" олонхоһын да яҙып биргән. Константин Григорьевич Оросин, шулай уҡ "Тойон Нюргун" тигән олонхоны үҙе аҡ ҡағыҙға теркәгән Николай Филиппович Попов кеүек олонхоһуттар ана шундайҙарҙан булған. Олонхо яҙыу традицияһы Сахала әле лә дауам итә икән.

Олонхо өйрәнеп, олонхо ижад итеп, танылған шағир булып китеүселәр ҙә әҙ түгел. Был хаҡта мин Башҡорт дәүләт университетының башҡорт әҙәбиәте һәм фольклор кафедраһы ултырыштарында Саха иленән килгән Прасковья Сивцеваның тәүҙә кандидатлыҡ, унан докторлыҡ диссертацияларын тикшергәндә башланғыс мәғлүмәт алғайным. Бындай шағирҙар, асылда, яҡут әҙәбиәтенә нигеҙ һалыусылар булған. Йәғни, икенсе төрлө әйткәндә, олонхо йәш әҙәбиәттең тыуыуына, үҫеп китеүенә, Маркс һүҙҙәрен файҙаланыңҡырап әйткәндә, нигеҙ һәм арсенал булған. (Уйлай ҡуймағыҙ тағы, Маркс сахаларҙы күҙ уңында тотҡан икән тип. Юҡ. Ул, грек мифының грек сәнғәте өсөн ниндәй әһәмиәткә эйә булыуы хаҡында һүҙ йөрөткәндә, шулай тигән).

Саха эпосын башлап тикшереүсе, саха совет әҙәбиәтенә нигеҙ һалыусы П.А.Ойунский( әйткәндәй, конференция ваҡытында беренсе секция менән миңә рәйестәшлек иткән күренекле фольклорсы Сардана Ойунская уның ҡыҙы булып сыҡты), саха халыҡ шағиры В.М.Новиков – Кюннюк Урастыров, шағир-импровизатор М.Н.Тимофеев-Теплоухов, сәсмәүер оҫтаһы С.С.Яковлев-Эрлик Эристин, шағир С.С.Васильев кеүек саханың өлкән быуын әҙиптәре бала саҡтарынан уҡ олонхо мөхитендә, олон-

хо стихияһында тәрбиәләнеп, олонхо эстетикаһын үҙләштереп, олонхоса фекерләргә өйрәнгәндәр. Шуның менән бергә уларҙың һәр береһенең был тәңгәлдә үҙ ҡиблаһы ла булған. В.В.Илларионов әйтеүенсә, В.М.Новиков-Кюннюк Урастыров: "Миңә тиҫтәләгән олонхоһуттар башҡарыуын тыңларға насип булды. Әммә Чээбий кеүек матур һөйләгән олонхоһутты осратҡаным булманы. Ул поэтик импровизацияға маһир ысын олонхоһут ине", – тип әйтер булған. Эрлик Эристиин иһә үҙе тыуған наслегтағы И.К.Платонов-Ырыа Илья менән Хоосой тигән танылған олонхоһуттар менән дуҫ булған. Ғөмүмән, П.А. Ойунский, Кюннюк Урастыров, Теплоухов, Эрлик Эристиин С.С.Васильев ише саха әҙиптәрен *олонхоһут яҙыусылар* тип йөрөтәләр. Һәм, әлбиттә, уларҙың традицияһы ла артабан олонхосылыҡ традицияһының йәнләнеүенә сәбәп була.

Бер мәлде, тематик оҡшашлығын, уртаҡлығын иҫәпкә алып, булған олонхоларҙан елле генә бер йыйылма текст төҙөп тә маташҡандар икән. Шул маҡсаттан олонхо яҙып алыу буйынса конкурс та иғлан иткәндәр: кем дә кем иң тулы, иң төҙөк, художестволы яҡтан иң сифатлы текст яҙып ебәрә, шул еңеүсе була, йәнәһе. Тупланған материалды бер-береһенә теркәп, йыйылма текст төҙөүҙән бер ни ҙә килеп сыҡмай. Мәгәр конкурс һәйбәт кенә һөҙөмтә бирә: олонхо ижад итеү, ижад ителгәндең иҫкеһен дә, яңыһын да ҡағыҙға төшөрөү эше йәнләнә. Әйтмәксемен. Беҙҙә фольклорҙың әлегә ниндәйҙер өлгөләрен яҙып алыуға киң йәмәғәтселекте йәлеп итеү маҡсатында конкурс үткәрелгәне юҡ юғын. Әммә уҙған йөҙйыллыҡтың 30-сы йылдарында, әле яңыса уҡый-яҙа белеүселәребеҙ иҫәпле генә саҡтарҙа, халҡыбыҙ ижадын яҙып алырға ваҡытлы матбуғат аша саҡырыу менән мөрәжәғәт итеү ярайһы ғына ыңғай һөҙөмтә биргән. Шул заманда хәҙерге Тарих, тел һәм әҙәбиәт институты янында елле генә фольклор фонды хасил була. Ваҡытлы матбуғат биттәрендә лә айырым өлгөләр, хатта ки гәзит биттәрендә лә эпостар баҫтырыла башлай. Фольклор йыйыу эшенең республикала йәнләнеүенә, атҡарылған эшенең күләменә ҡарап, яҙып алыусыларға билдәле күләмдә әжер биреү ҙә ныҡ булышлыҡ итә. Хөкүмәттең ярҙамы менән, әлбиттә. Туған фольклорыбыҙҙы төптән белгән оло йәштәге кешеләр барында ятып ҡалғансы атып ҡал, тигәндәй, әле лә шул эште тергеҙгәндә, ҡайһылай ҙа отор инек. Бәлки сахалар кеүек фольклор йыйыусылар конкурсы ойоштороrғалыр. Ниҙер уйларға кәрәк. Юҡһа, ҡайһы бер цивилизациялы халыҡтарҙағы һымаҡ, йәнле фольклорҙан ҡолаҡ ҡаҡҡас, ах та ух килеүебеҙ бар, үкенеүҙәр артынан үкенеүҙәр белдереп... Шулай булмаһын өсөн, был эштең дәүләт күләмендәге мөһим әһәмиәткә эйә икәнен, дөйөм халыҡ, киләсәк быуындар мәнфәғәтендә һис киҫекмәҫтән атҡарылырға тейеш, тип таныу һәм уға ең һыҙғанып тотоноу ғына кәрәк.

Саха илендә олонхо традицияһын йәнләндереүгә мәктәп уҡыусылары, художестволы үҙешмәкәр коллективтар араһында уны башҡарыу оҫталығына ярыштар үткәреү ҙә бик ҙур булышлыҡ итә.

Башҡортостандағы Тарих, тел һәм әҙәбиәт институты һымаҡ ғилми тикшереүеү институтын сахалар, беҙҙән айырмалы рәүештә, Саха (Яҡут) Республикаһы Фәндәр академияһы составына индереп, киңәйтә биреп, Гуманитар тикшеренеүҙәр институты тип үҙгәрткәндәр ҙә шунда "Олонхо бүлеге" ойоштороғандар.

Элегерәк ҡырғыҙҙарға күҙ ҡыҙа ине. Ни өсөн тигәндә, бер эпос буйынса (данлыҡлы "Манас" эпосын һаҡлау, өйрәнеү, таратыу буйынса) республика президенты эргәһендә "Манас" дирекцияһы ойоштороғандар ине улар.

Якутскиға килеп, ҡалмыҡ фольклорсыһы Б.Б.Оконов менән танышып, унан Ҡалмыҡстанда ла милли эпосты һаҡлау буйынса президенттары ҡатнашлығында эш алып барыла башлауын ишеткәс, йәнә эс көтөрләп ҡуйҙы. Көтөрләрлек тә шул. Уларҙа Рәсәй фәндәр академияһының Ҡалмыҡ гуманитар тикшеренеүҙәр институтында әллә ҡасан уҡ "Жангар ғилеме (джангороведение) секторы" төҙөлгән. Жангар ғилеме байтаҡ йылдар буйы ҡалмыҡ ғилеменең (калмыковедениеның) үҙаллы бер тармағы иҫәпләнә икән. Әлеге көндә лә тик ятмайҙар ҡалмыҡ дуҫтар. Киреһенсә, был йәһәттән

эште тағы ла әүҙемерәк, йылдамыраҡ алып баралар имеш. Түбәндәге факттар ана шул турала һөйләй ҙә инде. Элекке "Жангар ғилеме секторы" урынына ҡалмыҡ коллегаларыбыҙ «Жангар ғилми үҙәге» булдырғандар. Уның төп маҡсаты – "Жангар" эпосын комплекслы өйрәнеү һәм уны пропагандалау. Ошо эште йылдам рәүештә киң йәйелдереү һәм яҡшы һөҙөмтәләргә ирешеүгә Ҡалмыҡстан Республикаһы Президентының 1996 йылдың 23 сентябрендәге "Ҡалмыҡ эпосы "Жангар"ҙы өйрәнеү һәм үҙләштереүҙә дәүләт ярҙамы тураһында" тигән Указы һәм шуны бойомға ашырыу маҡсатында Ҡалмыҡстан Министрҙар Кабинеты ҡабул иткән "Жангар" тигән маҡсатлы Программа ҙур роль уйнаған. Ул Программа 1997-2001 йылдарға иҫәпләнгән.

Ә инде сахаларҙың да тик ятмауы хаҡында 1999 йылда Бишкәктәге конференцияла осрашҡанда Саха(Яҡут) Республикаһы делегацияһы етәксеһе А.Н.Жирков менән профессор В.В.Илларионовтан ишетеп белә инем инде. Әле үҙҙәренә килгәс, шул мәғлүм булды. "Сахалар ҙа тик ятмай", тип әйтеү – бер нәмә лә әйтмәү менән бер имеш. Бында бөтә кимәлдә лә, бар ерҙә лә, аяғына баҫҡаны, ниҙән ултырғанының олонхо менән мауығыуы хаҡында әле мин теркәштергән мәғлүмәттәр генә лә шулай тип раҫларға нигеҙ була алыр ине. Бынан тыш, беҙ тағы шуны ла белдек. Республикала *"Олонхо ассоциацияһы"* төҙөлгән. Уның президенты итеп Саха иленең Президенты М.Е.Николаев үҙе һайланған. "Ундай президент – формаль етәксе генә инде ул", – тип әйтеүсе булыуы ихтимал. Юҡ икән шул. Ассоциацияның президенты ошо ойошма советының президиумы атҡарған ағымдағы эштәр менән етәкселек итә. Ултырыштар үткәрә, ултырыштан ултырышҡа тиклемге арала төрлө ҡарарҙар ҡабул итә. Ил эсендәге, ил тышындағы йәмәғәт ойошмалары менән бәйләнеш урынлаштыра. Ассоциацияның штаттағы хеҙмәткәрҙәренә эш хаҡы билдәләй. Беҙ барғандың иртәгәһенә М.Е.Николаев рәйеслегендә ассоциацияның сираттағы ултырышы булды.

"Олонхо ассоциацияһы" – үҙ-үҙен финанслай торған ойошма. Уның үҙ балансы, банкта үҙ иҫәбе бар. Ул сит илдәрҙәге шундай уҡ учреждениеларҙа ла иҫәп аса ала. Ғөмүмән, ассоциация – төшөп ҡалғандарҙан түгел, үҙ уставы, үҙ программаһы булған һәм республика ҡурсалауында эшләгән йәмәғәт ойошмаһы. Әйткәндәй, уның уставы ла, программаһы ла юғары кимәлдә хупланған, юстиция министрлығы тарафынан раҫланған. Ҡайҙандыр, кемдәндер ишетмеш, ниҙәндер уҡып белмеш – бер нәмә, шул һүҙ барған эштә туранан-тура ҡатнашҡан кешенең ауыҙынан ишетеү икенсе нәмә. Миңә "Олонхо ассоциацияһы"ның вице-президенты, Саха (Яҡутстан) Республикаһының халыҡ шағиры Савва Тарасов менән әңгәмәләшергә насип булғайны. Әле шул әңгәмәне тәҡдим итмәксемен.

*Ә.С.* Был ассоциация ниндәй маҡсаттан сығып, ҡасан ойошторолғайны?

*С.Т.* "Олонхо ассоциацияһы" 1999 йылдың майында ойошторолдо. Быға олонхоның яҡынса тыуыу ваҡытын билдәләү сәбәпсе булды. Ғалимдар, оҙаҡ уйлана торғас, мәғлүм булыуынса, 1250 тигән датала туҡталды. Штаб төҙөп алдыҡ. Нимә менән шөғөлләнергә тейеш икәнебеҙҙе асыҡланыҡ. Беренсенән, олонхоны һаҡлау, икенсенән, уны пропагандалау һәм өсөнсөнән, үҙебеҙ йәшәп ятҡан дәүер олонхоһын тыуҙырыу. Беҙ – асылда, Гуманитар тикшеренеүҙәр институтындағы Олонхо бүлегенең эшен пропагандалаусылар. Ә унда оҙаҡ йылдар олонхоны тикшереүгә махсуслашҡан белгестәребеҙ эшләй беҙҙең. Ғалимдар халыҡ араһынан йыйылған материалдарҙы кабинеттарында тикшереп ултыра, ә беҙҙең ассоциация республика халыҡтары араһында эшләй.

Саха Республикаһында утыҙ бер улус бар. Шуларҙың егермеһендә яҡуттар күпселекте тәшкил итә. Быуаттар буйы тап ана шул улустар ерендә олонхо тыуа торған булған. Хәҙерге көндә, миңә мәғлүм булғанынса, ун ике улуста беҙҙең ассоциацияның филиалы бар. Беҙ иҫәпһеҙ күп халыҡты йәлеп итергә тырышып ятмайбыҙ. Үҙ тирәбеҙгә олонхоға ысынлап күңелен биргән, олонхоны ҡәҙерләгән энтузиастарҙы ғына ылыҡтырырға теләйбеҙ. Ике улуста, атап әйткәндә, Горный менән Усалдан

улустарында, уларҙың хакимиәт башлыҡтарын күндереп, ике “Олонхо үҙәге“ ойоштороу бәхетенә ирештек.

Егерменсе быуат урталарында Усалдан улусында егермеләп олонхо башҡарыу оҫталары – олонхоһуттар булған. Улар олонхоның йәнле репертуарҙа йәшәүен кәүҙәләндерәләр. Ул олонхоһуттарҙы бөтә Яҡутстанда яҡшы беләләр ине. Беҙҙең иҫәпләүҙәр буйынса, 50-се йылдарға тиклем бер Горный районында ғына ла (хәҙер улус тибеҙ инде, боронғоға кире ҡайтып) ун ике олонхоһут йәшәгән һәм ижад иткән. Әйткәндәй, минең үҙ атайым да күренекле олонхоһут ине. Уның атаһы ла, бер туған апайы ла мәшһүр олонхоһут булған. Атайҙың ике туған ағайы Григорий Михайлович Казанцев та олонхоны оҫта башҡара торғайны. Уны алыҫ улустарҙа ла, тауҙарҙа ла, төпкөл приискыларҙа ла һәйбәт беләләр ине. Үҙе сығарған олонхоларҙы пропагандалап, бөтә Яҡутстанды йәйәүләп урап сыҡҡан кеше ине ул. Бына шуға күрә лә, “Олонхо ассоциацияһы“на минең дә йәлеп ителеүем осраҡлы түгел, тип әйтмәксемен.

Заман алға бара. Заманалар үҙгәрә. 50-се йылдарҙа дан тотҡан олонхоһуттар ҡайтмаҫ ергә китеп бөттө. Хәтер тоноҡлана төштө. Замана кешеһен икенсе нәмәләр мауыҡтыра башланы. Бала саҡтан уҡ эпос менән яҡшы таныш булыуымды иҫәпкә алып, саҡырҙылар ҙа инде әле һүҙ барған ассоциация эшенә.

Данлыҡлы олонхоһуттар йәшәгән улустарҙа уларҙың исемен мәңгеләштереү буйынса ла эш алып барабыҙ. Минең туған улусымдағы мәшһүр олонхоһут Семен Григорьевич Алексеев күптән түгел генә вафат булды. Быйыл уның йөҙ йыллығын билдәләнек.

Кисә институт залында Николай Михайлович Тарасов тигән олонхоһуттың сығышына шаһит булғанһығыҙҙыр?

*Ә.С.* Эйе, эйе. Оло ғына йәштә. Яңғыҙы сығыш яһаны.

*С.Т.* Ул да – минең алыҫ ҡәрҙәшем. Тарасовтар нәҫеленән бөгөнгө көндә имен-һау берҙән-бер олонхоһут ул. Уға етмеш ике йәш. Әммә тауышы ла, хәтере лә ҡартаймаған. Бына шулай беҙ өлкән быуын олонхоһуттарының тәжрибәһен яңы быуындарға тапшырыуға булышабыҙ. Ошо маҡсатта айырыуса мәктәптәрҙә әүҙем эшләйбеҙ. Нахакан улусында өсөнсө йыл уҡытыусыбыҙ Елизавета Егоровна олонхо дәрестәре үткәрә. Эште ул шунан башланы: тәүҙә, баласағаны, олонхо ни, шуның менән таныштырып сыҡты. Шунан йырға һәләтле балаларҙы айырып алды, улар менән махсус шөғөлләнде. Һәм бына быйылғы йылдың мартында олонхо байрамы үткәрҙеләр. Беҙ ҙә ҡатнаштыҡ ул байрамда. Леня тигән малай шунда үҙе ижад иткән олонхоны башҡарҙы. Уның олонхоһы утыҙ минут дауам итә. Ленянан тыш тағы ике ҡыҙ-олонхоһут үҫеп сыҡты был мәктәптә. Уларҙың олонхолары ла яртышар сәғәткә һуҙыла.



*Олонхоһут яҡут ҡыл-ҡумыҙында уйнай*

*Ә.С.* Улар китаптарҙа баҫылған олонхоларҙы башҡарамы, әллә үҙҙәре йөрөп, олонхоһуттарҙан яҙып алғанды башҡарамы?

*С.Т.* Әлбиттә, улар баҫылып сыҡҡан олонхоны иғтибар менән өйрәнә, йөкмәткеһенә төшөнә, биҙәктәренә иғтибар итә. Шунан шул уҡ сюжетты үҙҙәренсә интерпретациялайҙар. Шулай олонхоларҙың яңы вариант, версиялары тыуа.

*Ә.С.* Ассоциацияғыҙҙың төп маҡсаты олонхоны таратыу, уны пропагандалау, тинегеҙ бит инде. Әле әйткәндәрегеҙҙән тыш, ошо маҡсатта тағы ниндәй юлдарҙы файҙаланаһығыҙ?

*С.Т.* Уҙған йылда олонхо байрамдары үткәрҙек. Олонхо байрамдарына, кисәләргә интеллигенцияны йәлеп итәбеҙ. Кем олонхоны башҡара, кем яңы текстар яҙа, барыһын да саҡырабыҙ.

Бына быйыл Яҡут дәүләт университеты профессоры Н.К.Шамаев үҙе ижад иткән олонхоһын тәҡдим итте.

*Ә.С.* Теҙмә телмәр (шиғыр) рәүешендәме, әллә сәсмә телмәр рәүешендәме?

*С.Т.* Шиғыр формаһында яҙылған. Бөгөнгө темаға ла олонхо сығарыусылар бар. Яҙма олонхо, яңы олонхо... Мин әлегә был мәсьәлә хаҡында ныҡлап уйланғаным юҡ. Сөнки аңлап та еткермәйем...

*Ә.С.* Яңы осор хаҡындағы олонхо урыҫтарҙың теге мәлдә, яңы осор героикаһын сағылдырабыҙ, тип, новины ижад итеп маташыуҙары менән бер булыуы ихтимал түгелме икән?

*С.Т.* Шулайыраҡ булыуы ихтимал. Хәйер, ваҡыт күрһәтер — продуктив күренешме был, әллә юҡмы.

*Ә.С.* Һеҙҙә быуындан-быуынға, нәҫел ебе буйынса бирелгән олонхоһутлыҡ булған. Шуны белге килә: шундай олонхоһуттар репертуарында ниндәй олонхолар булды икән?

*С.Т.* Минең атайҙың репертуарында өс олонхо бар ине. Уларҙы 1941 йылда яҙып алдылар, улар барыһы ла ошо институттың олонхо бүлегендә һаҡлана. Хәтеремдә, атайым, апайым, тағы ике ағайым дүртәүләшеп бер олонхоны башҡарғайны. Был хәл 1939-40 йылдар тирәһендә булды. Тимәк, дүртәүһенең дә репертуарында бер үк олонхолар булған.

*Ә.С.* Дүртәүләшеп башҡарҙылар, тинегеҙ. Алмаш-тилмәшме? Әллә ролдәр буйынса бүлешепме?

*С.Т.* Берәүһе башлап ебәрә, ролһеҙ һөйләү урынын. Артабан ролдәр буйынса.

*Ә.С.* Кисәге олонхоһуттар кеүек инде?

*С.Т.* Эйе, эйе. Нәҡ шулай. Артабан йәнә шуны әйтергә кәрәк. Беҙҙә һеҙҙәге һабантуй һымаҡ яҙғы байрам үткәрелә. *Ысыах* тиҙәр уны. Быйыл ысыахты олонхо башҡарыу менән астыҡ. Асыҡ ялан. Аттарға атланған батырҙар. Һыбайлы ҡыҙҙар. Шамандар...

*Ә.С.* Театраль күренеш инде?

*С.Т.* Эйе, эйе. Бына шулай олонхоны пропагандалайбыҙ.

*Ә.С.* Аҡса яғы нисек?

*С.Т*. Беҙ йәмәғәт башланғысында, олонхо бүлеге менән берлектә эшләйбеҙ. Улар беҙҙе командировкаға йөрөтә. Беҙ бит уларға эшләйбеҙ.

*Ә.С.* Ассоциацияға ағза булып кемдәр ингән? Мәҫәлән, башҡалағыҙ Якутскиҙа?

*С.Т.* Төрлө һөнәр эйәләре. Электрик инженер ҙа бар. Ул үҙе яҙыштыра. Баяғы әйткән профессор. Фольклорға яҡын торған әҙиптәр, башҡалар.

*Ә.С.* Үҙҙәре олонхо яҙыуҙан тыш, олонхоның сюжетына эпик әҫәрҙәр ижад итеүселәр юҡмы?

*С.Т.* Ундайҙар юҡ. Инде һүҙҙе түңәрәкләп, шуны әйтке килә. 1972 йылда яҡут яҙыусылары делегацияһы составында мин дә Башҡортостанда булғайным. Бик матур һәм иҫтәлекле көндәр үткәрҙек беҙ унда. Башҡорт дуҫтарыма ҡайнар сәләм!

Ғилми йыйындарҙың шул яғы әһәмиәтле. Унда үҙеңдең докладың менән башҡаларҙы таныштырыуҙан ғына эш бөтмәй. Башҡаларҙы ла тыңлап, һине ҡыҙыҡһындырған өлкә буйынса, тирәяҡта ниҙәр эшләнеүе, фән ҡайһы йүнәлештә үҫеүе хаҡында мәғлүмәттәргә юлығаһың, артабан да үҙ ҡаҙаныңда ғына ҡайнап ятмаҫ өсөн тәжрибә туплайһың, фәһем вә ғибрәт тә алаһың. Яңы таныштар табаһың. Ә бындай танышлыҡ ғилми бәйләнештәр урынлаштырыуға сәбәп булыусан.

Конференция көндәрендә мин шуға иғтибар итә ҡуйҙым. Бик тә һомғол кәүҙәле йәш кенә япон егете, алға уҡ барып ултырып, бер докладты ла ҡалдырмай тыңлай. Янында тәржемәсе-фәләне лә юҡ. Әле диктофонын, әле видеокамераһын тоташтыра һала ла, микрофон һәм объективын докладсыға төбәй. Үҙе блокнотының асыҡ ятҡан биттәрен иероглифтар менән сыбарлай. Был инде ошо техник сараларына ышанып, тәржемәсе ялламағандыр. “Вәт, япон! Шуның шуныһында ла иҫәп-хисап менән эш итә, юҡбарға аҡса түгеп бармай. Ә блокнотына конференциянан, докладтарҙан алған тәьҫораттарын ғына теркәй бара торғандыр, моғайын“. Тәүҙә уның хаҡында шулай уйлай ҡуйғайным. Тәнәфестә ни күрәм, ни ишетәм: был һин дә мин урыҫ менән урыҫса, саха менән сахаса ғына һыпырта лабаһаң! Яҡыныраҡ килеп:

– Таныш булайыҡ. Мин Башҡортостандан, – тип исем-шәрифтәремде әйткәйнем, японым урыҫсалап:

– Мин Япониянан. Тиба университетынан. Филология фәндәре кандидаты, докторант Ямасита Мунэхиса, – тине лә был визиткаһын тотторҙо.

– Бында күптәнәнме? Әллә ошо конференцияға ғына килдегеҙме?

– Мин бында дүрт йыл йәшәйем инде. Олонхоны өйрәнеүҙе маҡсат итеп ҡуйҙым. Ни өсөн тигәндә, саха халҡын яҡшыраҡ аңлар өсөн уның эпосын белеү кәрәк икәненә төшөндөм. Был жанр – саханың ҡәҙимге рухи байлығы ғына түгел, халыҡтың күңелен дә кәүҙәләндерә. Фольклорҙың, шул иҫәптән эпостың, тәбиғәтенә төшөнөү өсөн, уны ижад итеп, быуындан-быуынға еткерә килгән халыҡтың телен дә яҡшы белергә кәрәк. Мин шуға ла тәүҙә саха телен өйрәндем.

Шулай тигәйне көндөҙ Ямасита. Ә кисен, ҡунаҡтар хөрмәтенә уҙғарылған кисәлә, олонхонан өҙөк башҡарып, бөтәһен дә таң ҡалдырҙы. Тимәк, ул олонхоға төшөнөү өсөн уны ижад иткән, һаҡлап килгән халыҡтың телен өйрәнеү менән генә лә сикләнмәгән, шул әҫәрҙе башҡарыу манераһына ла төшөнөргә тырышҡан. Шул икене бер тиң үҙләштереү – сит милләттең ижадын тәрәнерәк аңлауға булыша икәненә яҡшы төшөнгән яңы танышым. Быға ирешеү иһә – шул уҡ саханың күңел ҡапҡаһын шаҡара тартып асыу менән бер.

Үҙе әйтеүенсә, Ямасита олонхоны ғилми яҡтан өйрәнеү менән генә сикләнергә йыйынмай. Уны япон теленә тәржемә итергә лә ниәтләнә. Хәйер, былай "сикләнергә йыйынмай" тип әйтеү һис тә дөрөҫ булмаҫ. Дөрөҫөрәге, икенсеһе, тәржемә менән шөғөлләнеүе, тәүгеһенең сикле вә самалы булмауына гарантия хеҙмәтен үтәйәсәгенә иманым камил минең. Ни өсөн тигәндә, туранан-тура үҙ теленә ауҙарғанда, яҡут тексының һәр күҙәнәгенә инәсәк әле ул һәм үле тексҡа йәбешеп тә ятмаясаҡ, тәржемә итеү барышында, мәшһүр Пушкин шиғыр яҙғандағы кеүек, көйләп тә ултырасаҡ. Ошо яҡтан япон егетенең тәжрибәһе беҙҙең фольклор әҫәрҙәребеҙҙе тәржемә итеүгә еңел-елпе эш тип ҡараусылар өсөн өлгө булырлыҡ. Юҡһа, шул ҡараш арҡаһында, икенсе телдә беҙҙең фольклор әҫәрҙәребеҙ йыш ҡына төп нөсхәнән бөтөнләй ситләшә, тәржемәгә йәлеп ителгән әҫәрҙең йөкмәткеһе менән өҫтән-мөҫтән танышыу һөҙөмтәһендә яҙылған ирекле тәржемәгә, дөрөҫөрәге, ирекле интерпретацияға әүерелә, хатта унан ҡуяндың һурпаһының һурпаһы тәме лә сыҡмай башлай.

Минең яңы танышымдың конференциялағы сығышы ла фәһемле булды: "Хәҙерге ваҡытта олонхоны элекке хәлендә һаҡлап алып ҡалып булмаясаҡ. Минеңсә, ике юл бар. Беренсеһе — олонхоны бөгөнгө тыңлаусыға яраҡлаштырып, адаптация яһап биреү. Тик шундай һорау тыуа: былдай әҫәрҙе эпос тип атап булырмы? Икенсеһе – башҡарыусыларҙы ғына түгел, тыңлаусыларҙы ла тәрбиәләп алырға кәрәк. Бәхеткә күрә, Якутияла бындай эш алып барыла. Ишетеүемсә, күптән түгел олонхо башҡарыуға балалар араһында конкурс та үткәрелгән. Был яҡшы. Әммә тыңлаусыны әҙерләүгә әҙ иғтибар бирелә әлегә. Японияла, мәҫәлән, әкиәтселәр китапханаларҙа регуляр рәүештә балаларға әкиәт һөйләйҙәр. Балалар ихлас тыңлай. Быны үҙем һорашып белдем.

Хәҙер Яҡут илендә балалар өсөн олонхо буйынса бик күп китаптар сыға. Был бик һәйбәт. Шулай ҙа телдән башҡарыуға нығыраҡ иғтибар ителһә яҡшыраҡ булыр ине. Балаларҙың хыял итеү, ижади фекерләүе үҫешер ине. Хәҙерге дәүерҙә бөтә донъяла кешеләр информацияны күберәк төрлө күңел асыу саралары, күҙ арҙамында ҡабул итә. Телевидение менән компьютер кешеләргә әҙер информацияны ғына еткерә. Шуға күрә лә хыял итеү мөмкинлеген (воображение) үҫтерергә, үҙеңдең тәжрибәңде тупларға мөмкинлек сикләнә. Тимәк, информацияны телдән, ҡолаҡ аша ҡабул итеү мөмкинлеге хаҡында ла уйларға кәрәк.

Эпос элек халыҡ байлығы ине, хәҙер иһә фәндеке булып китте. Эпосты халыҡҡа кире ҡайтарып биреү – фольклорсының изге бурысы ул".

Бурысы – бурыс. Хәҙер был һүҙгә фольклор ғилеме яңы йөкмәтке һала. Фольклор әҫәрен, ишетмеш буйынса ғына ҡағыҙға төшөрөп, шуны нисек етте шулай архивҡа тапшырыу менән сикләнеү дәүере үтте. Ул әҫәрҙең башҡарылыш үҙенсәлеге, информаторҙың телмәр мелодикаһы, интонацияһы ла, әҫәрҙең

көйө лә сағылыш табырға тейеш. Хәҙер был эштәрҙе элекке технология нигеҙендә генә атҡарып булмай. Өр-яңы технологик сараларҙы файҙаланыу талап ителә. Конференция ошо мәсьәләгә лә ҡағылды. Атап әйткәндә, олонхоны өйрәнгәндә, пропагандалағанда, информацион-компьютер технологияһын индереү, яңы информация ресурстары, уларҙың мәғлүмәттәр банкын булдырыу хаҡында ла һөйләшеү булды. Сахалар Интернет аша мәғлүмәттәр ебәреү мөмкинлеген файҙаланыу, ҡулъяҙмаларҙы, һүрәттәрҙе сканерлап, электрон форматына күсереп, уларҙың һаҡланыу ғүмерен оҙайтыу хаҡында ла ҡайғырта башлағандар. Улар ҡулъяҙма, фотоһүрәт архивын ғына түгел, аудио-, видеояҙмаларҙы ла шулай күсереп, һаҡлау сараһын күрәләр икән. Шулай уҡ электрон китапхана, электрон нәшриәт эше һ.б. хаҡында ла һүҙ алып баралар.

Был ынтылыштар үҙешмәкәрлек кимәлендә генә, яҡты хыял йә ниәтләнеү генә булып ҡалмаған. Рәсми документтарҙа яҡланып, ғәмәли төҫ тә алған.

Яҡутстанда беҙгә шул да мәғлүм булды. Республиканың Дәүләт Йыйылышының(Ил Түмәндең) Вәкилдәр Палатаһы Фән, мәғариф, һаулыҡ һаҡлау буйынса комитеты рәйесе А.Н.Жирков етәкселегендәге эш төркөмө *“Яҡут эпосы олонхоны һаҡлау, өйрәнеү һәм пропагандалау буйынса 2000 йылдан 2004 йылға тиклемге дәүерҙә Президент программаһы“* тигән документ проекты әҙерләгән. Шул программала, яңы информацион технологияға нигеҙләнеп, принципиаль яҡтан өр-яңы ысулдар ҡулланып, олонхоға ҡағылышлы материалдарҙы һаҡлау һәм пропагандалау, өйрәнеү кәрәк икәнлегенә айырыуса ныҡ баҫым яһала. Айырым алғанда, олонхоны һаҡлау һәм пропагандалау өсөн республикала мөмкин осраҡта халыҡ-ара йәмәғәт башланғысындағы ойошма төҙөү, ЮНЕСКО ойошмаларының донъя халыҡтары ҡомартҡыларын һаҡлауға грантта ҡатнашыуы күҙ уңында тотола. Олонхоны һаҡлау һәм пропагандалау ойошмаһын республика хөкүмәте матди һәм техник яҡтан ҡурсаларға тейеш икән. Ошо эште тотҡарлыҡһыҙ киң йәйелдереү маҡсатынан сығып, программала ҡайһы бер норматив акттарға, атап әйткәндә, *“Саха (Яҡутстан) Республикаһының айырыуса мөһим милли-мәҙәни милке иҫәпләнгән объекттары“, “Саха (Яҡутстан) Республикаһының тарихи һәм мәҙәни ҡомартҡыларын дәүләт һаҡлауы хаҡында“ тигән закондарға үҙгәрештәр индереү; “Саха (Яҡутстан) Республикаһы халыҡтарының ауыҙ-тел ижады ҡомартҡыларын һаҡлау һәм файҙаланыу тураһындағы закон“* проектын әҙерләү, *“Героик эпос олонхо ҡомартҡыларын һаҡлау һәм файҙаланыу тураһында“ Президент Указын әҙерләү, “Героик эпос-олонхо ҡомартҡыларының Берҙәм дәүләт фондын булдырыу“* кеүек мөһим эштәргә иғтибар иттерелә. Программа проектында йәнә, Саха (Яҡутстан) Фәндәр академияһы һәм Яҡут дәүләт университеты нәшриәттәренең тематик пландарынан тыш, Хөкүмәт комиссияһы ҡарары менән олонхо буйынса ғилми монографиялар, йыйынтыҡтар, *СД РОМ*-да *“Халыҡ әҙәбиәте өлгөләре“* тигән серия баҫтырыу, олонхоны һаҡлау өсөн компьютерлы информацион система барлыҡҡа килтереү, шул система ярҙамында олонхолар серияһы, электрон китапхана булдырыу, Интернет селтәренә “Олонхо“ сайтын урынлаштырыу һ.б. бик мөһим эштәрҙе бойомға ашырыу ҙа ҡаралған. Программаны әҙерләүселәр олонхоның 1250 йыллығы уңайы менән ғилми конференциялар, улустарҙа Олонхо көндәре, йыл да “Олонхо иле балалары“ тигән фестивалдәр үткәреү, улустарҙағы олонхо үҙәктәре өсөн грант булдырыу; мәктәп программаларына олонхоны өйрәнеүҙе индереү, урта мәктәп, махсус урта һәм юғары уҡыу йорттары өсөн программалар, уҡыу әсбаптары, һәр төрлө альбомдар сығарыу кеүек эштәргә лә иғтибар иткәндәр. Әле телгә алынған һәм шуларға бәйле саралар өсөн дәүләттең 6044 мең һум аҡса бүлеүенә иҫәп тоталар бында. Беҙ ҡатнашҡан *“Донъя халыҡтарының эпик ҡомартҡылары контекстында олонхо“* тигән халыҡ-ара конференция ла, олонхоға бәйле мин телгә алған башҡа саралар ҙа – барыһы-барыһы ла Саха (Яҡутстан) Республикаһының *“Яҡут эпосы олонхоны һаҡлау, өйрәнеү һәм пропагандалау буйынса 2000 йылдан 2004 йылға тиклемге*

*дәүергә Президент Программаһы*“ның уңышлы бойомға ашырыла башлауы тураһында һөйләй.

Шуға ла Олонхоның 1250 йыллығына арналған халыҡ-ара конференцияла ҡатнашып, республика Президенты М.Е.Николаевтың яҡут олонхоһының ғилми өйрәнелеше хаҡында махсус доклад менән сығыш яһауы ла, Башҡортостан, Ҡырғыҙстан, Мәскәү, Япония ҡунаҡтарын ҡабул итеп, әңгәмәләшергә ваҡыт табыуы ла, әле генә һүҙ барған программаны әҙерләүсе эшсе төркөм етәксеһе А.Н.Жирков үҙенең сығышында: “Быуат ярым ваҡыт эсендә олонхоның йөҙ егерме тулы версияһы, йөҙҙән артыҡ сюжеты һәм уларҙың өҙөктәре, йөҙҙән артыҡ аудио- һәм видеояҙмаһы тупланған“, – тип уларҙың насар хәлдә һаҡланыуы, баҫтырып сығарыу эшенең ауыр булыуы хаҡында зарланып һөйләгәнен ишеткәс: “ Иртәгә үк ике компьютер бирәм, ултыртығыҙ. Баҫтырығыҙ. Олонхоның яҙып алынған бөтә версияларын да, варианттарын да донъяға сығарырға кәрәк“, – тип әйтеүе лә ил башлығының саха халҡының милли ғорурлығы булған олонхо яҙмышы менән яҡындан ҡыҙыҡһыныуына дәлил кеүек аңлашылды. Ошондай мөнәсәбәтте күргән беҙҙә был маҡсат, ниәт, вәғәҙәләр ҡағыҙҙа ғына ҡалмаҫ, тулыһынса үтәлер, үтәлмәй ҡуймаҫ тигән ышаныс, тимәк, алыҫ ҡәрҙәштәребеҙҙең уңышына ҡыуаныу тойғоһо нығынды ғына. Әле шулай тинем һәм шунда уҡ конференцияла яңғыраған бер цитата иҫемә килеп төштө. Ул шунан ғибәрәт ине: “Мы прорываем двойной железный занавес: преодолевая территориальную удаленность Якутии от общепризнанных центров цивилизации и освобождаясь от идеологических пут обособленности от мирового сообщества. И сейчас не столько мы открываем для себя мир, сколько мир открывает для себя нас.“

Был аҫыл һүҙҙәрҙең авторы ла Саха (Яҡутстан) Республикаһының Президенты М.Е.Николаев. Уларҙы ул әле 1992 йылда уҡ әйткән булған. Был һүҙҙәр бөгөн дә актуаль булып ҡала. Тик әле генә телгә алынған Президент Программаһынан сығып, “от идеологических пут“ тигәне урынына хәҙер “от информационных пут“ тп кенә әйткәндә лә була.

Бына ниндәй ниәт, маҡсаттар менән йәшәй ҡасандыр ирек даулаған башбирмәҫ һәм башэймәҫ бабаларыбыҙҙы туғандарса хәстәрлек менән үҙҙәренә һыйындырған, ахырҙа улар менән ысынлап та ҡоҙа-ҡоҙағыйлашып, туғанлашҡан саха ҡәрҙәштәребеҙҙең бөгөнгө вариҫтары. “Амин!“ тиәйек уларға! “Афарин!“ тип хуплайыҡсы уларҙы! Шулай тиәйек тә өлгө алырлығынан өлгө алайыҡ. Бер үк көнләшмәйек! Сәмләшәйек! Беҙҙең дә бына тигән, башҡаларға тәтемәгән, кемдәрҙеңдер күҙен ҡыҙҙырырлыҡ, тик милли ерлекле эпик ҡомартҡыларыбыҙ бар. “Урал батыр“, “Аҡбуҙат“, “Заятүләк менән Һыуһылыу“, “Аҡһаҡ ҡола“, “Ҡара юрға“, “Шүлгән батша менән Минәй батыр“, “Ҡуңыр буға“, “Бала бәшнәк“, “Ҡарас менән Аҡша“, Бабсаҡ менән Күсәк“, “Ек Мәргән“, “Ҡара ат“, “Байыҡ Айҙар сәсән“, “Юлай менән Салауат“ һ.б. “Урал батыр“ҙың үҙе генә ни тора! Шул исемде йөрөткән йәмғиәттәр, клубтар, ассоциациялар, бүлектәр, секторҙар, фестивалдәр, конкурстар, башҡаһын ойошторорға була. Ғилми-тикшеренеү институты, Фәндәр академияһы, Хөкүмәт, Президент һәм Президент аппараты кимәлендә. Өйрәнер өлгө бар, кадрҙар етәһе. Тик халыҡ шағиры Мәжит Ғафуриҙың бынан теүәл туҡһан бер йыл әүәл әсенеп әйткән һүҙҙәрен иҫтә тотоп, ғәмәли эшкә тотонорға ғына кәрәк. Кем оноткан, кем белмәй, хәтерегеҙгә төшөрәм генә. Буласаҡ халыҡ шағиры 1909 йылда Асылыкүл буйында ял итә. Шунда халыҡ йырсыларын, ҡурайсыларҙы саҡырып алып, йырҙар тыңлай. Ошо хаҡта “Заятүләк менән Һыуһылыу“ тигән башҡорт халыҡ эпосының 1910 йылдағы баҫмаһына яҙған инеш мәҡәләһендә телгә ала. Унда бына былдай һүҙҙәр ҙә бар: “Мин, сысҡан көтөп ултырған бесәй кеүек, ҡурай уйнаған һәм йырлаған башҡорттарҙың ауыҙҙарына ҡарап, башҡа нәмәләрҙе тамам онотоп, ҡурайға ҡушылған моңло тауышты ысын күңелем менән тыңлай инем. Башҡорттарым “Ҡара юрға“, “Өйҙәрәк“, “Таштуғай“, “Ашҡаҙар“, “Тәфтиләү“, “Һаҡмар“, “Көрән юрға“, “Кантондар“ тигән көйҙәрҙе берәмберәм һыҙҙыралар ине.“ Иғтибар итегеҙ, Ғафуриға бөгөн инде онотолған нин-

дәйҙер “Көрән юрға“, “Кантондар“ тигән йырҙар, көйҙәр тыңларға ла насип булған. Бынан тыш “Заятүләк“ көйөн уйнап та, йырлап та ишеттергәндәр уға. Шуларҙы тыңлап шағир тәрән тулҡынланыу, ләззәт кисереп кенә ҡалмай, борсола ла. Үҙен ни борсоғанын ул шулай аңлата: “Күл буйлап яңғырап киткән тауыштары (ҡурайсы менән йырсылар күҙ уңында тотола. – Ә.С.) мине рухани ләззәт менән ләззәтләндерә, фәҡәт был матур көйҙәрҙең башҡорттар араһында тиҙҙән юғалып, улар урынына татар таҡмаҡтары урынлашыуы хәтеремә килеп, мине бер аҙ хәсрәтләндерә ине.“ Шулай ти ҙә Ғафури, үҙенең инеш һүҙен былай тип тамамлай: “Башҡорттарҙың бөгөнгө хәленә ҡараған ваҡытта (1910 йылда уҡ шулай тиһенсәле! – Ә.С.), уларҙың көйҙәрен, йырҙарын һәм башҡа әҫәрҙәрен юғалтмай алып ҡалырға тырышыу кәрәк ине. Ләкин уларҙың тоҙ кеүек иреп бөтөүенә беҙгә күҙ һалырға бөгөнгө тәрбиәбеҙ, егетлек һәм ғәйрәтебеҙ етмәй шул“. (Ғафури М. Әҫәрҙәр. – Өфө, 1953. – 2-се т. – 162-164-се б.). Икенсе төрлө әйткәндә, буласаҡ халыҡ шағиры, милләтебеҙ ижадының яҙмышы хаҡында ҡайғыртайыҡ, уның юғалыуына юл ҡуймайыҡ, бының өсөн бары тәрбиәлелек, егетлек дәрте вә дарманы ғына кәрәк, тимәксе.

Әйҙәгеҙ, шул һүҙҙәрҙе күңелебеҙгә һеңдерәйек! Башҡаларҙан артта ҡалмайыҡ!

### 7. Күк көмбәҙен сатыр итеп

9 сентябрь. Кисә кис иҫкәртеп ҡуйыуҙарынса, беҙ, йылыраҡ кейенешеп, иртәнге туғыҙҙа пристандә торорға тейеш инек. Шуға күрә, йылдағынан йылдамыраҡ ҡыймылдап, ашап-эсеп, улбыл итеп, урамға сыға һалдыҡ. Халыҡ йыйылышып та өлгөргән. Һәм бына беҙ — бер автобус кеше — ҡаланың бер сигенән икенсе сигенә елдерәбеҙ. Уңда ла, һулда ла рекламалар. Киркоров килә икән. Уның сығышы бөгөн кис стадионда үтәсәк. Рекламаларҙың байтағы уның концертына саҡыра. Ҡайҙа ҡарама – ярым сиған, ярым һинд кешеһен хәтерләткән шул йырсының йылмандаған йөҙө.

Бында тағы шул күҙгә ташлана: йылылыҡ торбалары ер өҫтөнән үткәрелгән. Шунһыҙ булмай торғандыр. Мәңге туң ергә күмдең ни ҙә, күммәнең ни уларҙы. Хәҙер үк туңды иретәсәк тә, буйҙан-буйға һаҙлыҡ хасил буласаҡ. Унһыҙ ҙа тегендә лә бында ла батҡыл ерҙәр осрай.

...Ҡырылмаһа ҡырҡ төрлө боролоштар яһай-яһай, автобусыбыҙ әкренләп-әкренләп уңға тартыла бара, уңға тартыла бара. Һәм бына ҡаршыбыҙҙа дарья хасил булды.

– Лена! – тине кемдер.

– Өләүөнә! – тине икенсеһе. – Саха халҡы уны үҙҙәренсә шулай тип йөрөтә.

– Өләүөнә тип тә, Лена тип тә әйтергә ярамай, – тине эргәбеҙҙә ултырып килгән Агафья Еремеевна Захарова.

– Ни өсөн?

Бөтәбеҙ ҙә уға төбәлдек.

– Сөнки ул – туйындырыусы йылға, әсә хоҡуғындағы йылға. Әсәйгә кем исеме менән өндәшә?

Быға тиклем дә, әле автобуста килә ятҡан арала ла был ханымдың саха-яҡуттарҙың инаныстары, шаманлыҡ дине хаҡында һөйләүен ишеткәнгәме, берәү ҙә төпсөнөп торманы. Шул яуап менән килештеләр буғай. Ә мин, “Өләүөнә“не үҙебеҙсәгә әйләндереп, “Оло инә“ тигәнде аңлатмаймы икән был һүҙ, тип уйлап ҡуйҙым. Ниңә? Бик тә ихтимал. Ни өсөн тигәндә, Морат Аджи әйтеүенсә, урыҫтар Енисей тип атап йөрөткән оло дарьяның да исеме “инәй“ (“әсәй“) тигән һүҙҙе үҙ эсенә ала икән. Боронғо төркиҙәр уны Инәсай – Инә йылға, Йылғалар әсәһе тип йөрөткән ти бит.

Өләүөнә өҫтөнән әкрен генә быу күтәрелә. Ләкин томан юҡ. Һалҡынса. Кешеләр елдән ышыҡланып, һүрән генә булһа ла ҡояш нуры төшөңкөрәп торған урын эҙләп, пристань хеҙмәтен үтәүсе иҫке баржаның өҫҡоролмалары араһына таралышып, төркөм-төркөм сөкөрләшергә тотондо. Ә мин (шпион түгелме икән был, тип шикләнгәндәр шикләнһен, әйҙә) берсә видеокамера, берсә фотоаппарат менән күҙ күреме еткеһеҙ ерҙәргә йәйрәп ятҡан Өләүөнә туғайҙарын, яр буйы ҡоролмаларын таҫма хәтеренә һалырға тырышам.

Даръяның аръяғында яр ситенәсә ҡыуаҡлыҡтар үҫкән. Ағастар әле япрағын ҡоймаған. Бары төҫтәре генә уңған. Катерға ултырып киткәс тә, йылғаның ике ярындағы пейзаж әллә ни үҙгәрмәне. Тик һул яҡта, яр ситенә яҡын килергә ҡурҡҡандай, бер-береһенә һырынған тәпәш кенә тауҙар һырттарын уйнатып ҡалғылай ине. Агафья Егоровна ҡунаҡтар алдына баҫып, уңлы-һуллы ҡулдарын тәҙрәгә һелтәй-һелтәй, юл буйынса ошо йылға менән бәйле легендалар менән таныштыра барҙы. Ә түбәнгә ҡарай етеҙ генә елдереүсе катерыбыҙ, ыҡсым ғына киноэкранды хәтерләткән тәҙрәләрендә күренеш артынан күренештәр күрһәтеп, гидыбыҙ һөйләгәнде иллюстрациялай барҙы.

Беҙҙең ҡараштар етмәҫ тарафтарҙа Өлөүөнәгә Аллан (беҙгә ул урыҫ транскрипцияһында Алдан булараҡ мәғлүм), тағы эреле-ваҡлы әллә ниндәй йылғалар килеп ҡушыла. Гидыбыҙҙың да бер легендаһына икенсеһе, өсөнсөһө ялғана бара.

Катерҙың талғын ғына бәүелеүенәнме, әллә гидыбыҙҙың йомшаҡ ҡына тауышына ирәйепме, бәғзе берәүҙәр әкрен-әкрен генә нәүем баҙарына юл алды. Мин дә күҙҙәремде йомам. Тик йоҡламайым. Гидыбыҙ һөйләгәндәрҙе күҙ алдыма килтереп, кино ҡарағандай, кинәнеп кенә килмештәмен... Бына ҡайҙалыр ҡылыс сыңы, уҡтар шыйлаған, аттар кешнәшкән, миңә аңлашылмаған телдә аҡырышҡан тауыштар ишетелгәндәй булды ла, кемдәрҙер һайт-һайтлап мал ҡыуғандай, кемдәрҙер әйҙәләп ҡысҡырғандай тойола башланы. Ят бауырҙар менән яғалашып тороуҙан ялҡып, бер батыр бөтә ғаиләһе, хеҙмәтселәре, мал-тыуары менән Анхаранан (Ангаранан) ошо Оло йылғаға килеп сығып, ҡайҙа һал һаллап, ҡайҙа йәйәүләп, ҡайҙа һыбайлап, әле генә беҙ ҡуҙғалып киткән тарафҡа, Сайсары еренә, юлыға. Илен ташлап киткән ул батырҙың исем-аты Омоғай Баай булған. Ул төйәк иткән Сайсарыны аҙаҡ Туймаада үҙәне тип йөртә башлайҙар.

“Туймаада“ тигән атаманы ишеткәс, үҙебеҙҙең “Туймазы“ иҫкә килеп төштө. “Бәлки улар тамырҙаштыр ҙа“, – тип уйлап ҡуйынылды. Шулай тинем дә икенсе уйға ла ирек бирҙем. Бөрйәндә йәй көнө БДУ студенттары менән фольклор экспедицияһына йөрөгәндә Ҡотан ауылы эргәһендәге бер тауҙың Туйбағы тип аталыуына иғтибар иткәйнем. Халыҡ аңлатыуынса, был атама шунда бер байҙың туй үткәреүенән килеп сыҡҡан. Шулай ҙа миндә “Ай-һай, мифик Ирәм бағы тигән ер кеүек был да исеме “Туй бағы“ (йәғни Туй баҡсаһы) булманымы икән“ тигән уй тыуғайны. Әле Туймаада тигән урындың да сахалар өсөн туй (байрам) урыны булыуы: бында уларҙың Ысыах байрамы үткәрелеүе тураһында ишеткәс, был уйым ныҡына төшкәндәй булды. “Туйбағы“ менән “Туймаада“ ла ауаздаш ҡына түгел, тамырҙаш булһа, ни ғәжәп, тип ҡуйҙым.

Якутск ҡалаһы Туймаада үҙәнендә ултыра. “Нәҡ ошо ерҙе Омоғай Баай ни өсөн һайлаған икән?“– тип уйларға ла өлгөрмәнем – шунда уҡ алдым ул һорауға яуапты. Тыуған ерендәге Аан-Эһер тигән данлыҡлы шаман, бер байҙың иҫәр ҡыҙын ҡамлағанында, һигеҙ йылға кисеп, ошо беҙ йөҙөп китеп барған оло даръяға ҡойоусы туғыҙынсы йылғаға барып еткәс кенә, тегенең ауырыуының серен тапҡан ти. Шунан ҡайтышлай Ойуу Хатың, Ой Бэс, Улағата, Туймаада тигән ерҙәргә һуғылған, имеш. Шунда уға сахаларҙың ағастарҙы бер-береһенә һөйәп эшләгән ҡыуыш кеүек йәйге торлағы – *урасу* һымаҡ бейек кәүҙәле ҡатын осрай. Ул ошо ерҙәрҙең эйәһе булған, ти. Шул зат Аан-Эһергә: “Шаман, миңә йорт-ере, ейер ризығы булмаған берәй кешеңде ебәр. Мин уны һыйындырырмын да, ашатып-эсерермен дә, нәҫел-нәсәбен дә ишәйтеп бирермен“, – тигән, ти. Омоғай Баай ана шуға Туймаадала төпләнеп ҡала була.

Туймаадаға тәүге булып килеп ултырһа ла, сахалар Омоғай Баайҙы түгел, ә уның йәмһеҙ ҡыҙынан тыуған ейәненең улын, йәғни ҙә уның бүләһен, төп бабалары иҫәпләй. Ә Омоғай Баайҙың бер-бер артлы ике ҡыҙы тыуа. (Уларға тиклем бисәһе уға гел уландар табып биреп торған ти). Бер ҡыҙы бик сибәр булған. Уға Нуурай тип исем ҡушып, бик яратҡан, ти, ирле-бисәле. Икенсеһен, Сыппай тигәнен, йәмһеҙ булғаны өсөн, яратмағандар.

Әмәлгә ҡалғандай, шул дәүерҙә генә, Сыңғыҙ хандан ҡасып, Байкүл (Байкал) буйында йәшәп ятҡан Татаар Тайма тигән батырҙың улы Эллэйға монгол ханы Хаан Тойон шулай ти: “Татаар Тайма улы Эллэй, һеҙ йәшәгән Байкүлдең төбөндә ҡатын-ҡыҙ затына оҡшаған бер шәүлә күренә. Һин ҡыйыу кеше бит инде. Ни хәйлә менән булһа ла, шуны алып сығарып бирерһең?“ – тигән, ти.

Легенданың ошо еренә еткәс, мин терт итеп ҡуйҙым. Бәй, был ни хазина тураһындағы бер башҡорт әкиәтен хәтерләтеп ҡуя түгелме. Унда хан үҙенең яугирҙарына: “Ана һыу төбөндә бер аҫыл таш ята, шуны алып бирең!“ – ти. Күптәр сума – ҡабат ҡалҡып сыға алмай. Тағы сумалар – таба алмай, үҙҙәре батып үлә. Имен сыҡҡандарын да йәлсетмәйҙәр: бурысты үтәмәгән өсөн баштары киҫелә тора теге меҫкендәрҙең. Бер егет, атаһының кәңәшен тотоп, аҫыл таш артынан һыуға сумып тормай – нәүбәте еткәс тә, эргәлә үҫеп ултырған ағасҡа үрмәләй башлай.

– Һай, ахмаҡ. Ни ҡылана ул?!

– Һыуға сум! Һыуға сум!

– Сума һал тиҙерәк!

Халыҡ шулай зыу килә, ә егет үрмәләүен белә. Үрмәләй торғас, ағастың башына менеп етә. Менеп тә етә, ундағы ҡош ояһына ҡулын тыға һалып ала ла шыуып килеп тә төшә. Килеп төшөү менән:

– Был ни ҡыланыуың? – тип аҡырышҡан һанаттарҙа ла эше юҡ, хан янына йүгереп килеп етә егетең. Килеп етә лә уның усына аҫыл таш һала. Таштың ялт-йолт итеүенә ҡояштың нуры һүрелгәндәй тойолған, ти.

– Һай, аф-фарин! – тине, ти, хан. – Йә, әйт, егет, быға нисек башың етте? – тип һораны, ти, хан.

– Ханым, солтаным, йәберләмәҫкә һүҙ бирһәң генә, әйтәм. Һүҙ бирмәһәң, әйтеп тә тормайым: барыбер ҡотайтмаясаҡһың, – тигән ти егет.

– Вәғәҙә! Вәғәҙә!

– Ханым, солтаным, атайым өйрәтте был аҡылды. Һеҙ ҡарттарҙы үлтереп бөтөргә ҡушҡанда, мин уны йәшереп алып ҡалғайным. Ҡарттар – аҡыл һандығы.

Шул һүҙҙәрҙе ишеткәс, хан тегенең атаһын саҡыртып алып, аталы-уллы икеһен дә, алды-арттарынан ҡалғансы, һыйлап, бөтмәҫ байлыҡтар биреп, имен ҡайтарып ебәргән ти. Шунан һуң: “Ҡарттарҙы үлтерергә“ тигән фарманымдан ваз кисәм“, – тигән, ти хан...

Әкиәттә шулай. Ә легендала? Бында хәл башҡаса булған икән. Егеттең атаһы Татаар Тайма: “Миңә Сыңғыҙ хан да шулай тигәйне. Ҡасайыҡ беҙ бынан“, – тип Эллэйҙе ҡасырға димләй.

Бына өс йөҙ йәшлек һуҡыр атаһын күн ҡуржынға һалып йөкләп, Эллэй батыр баш һуҡҡан яғына сығып тая. Юҡ, атаһы уға ҡайһы яҡҡа барырға: “Төньяҡҡараҡ, төньяҡҡараҡ ҡасайыҡ“, – тип юл өйрәтеп бара.

“Бәй, атаһын йөкләп юлға сыҡҡан“ мотивы минең уйҙарымды икенсе яҡҡа алып китте түгелме? Эйе шул. Уйҙарыма эйәреп, мин үҙебеҙҙең яҡтарға, анығырағы, Ырымбур далаларына, Һарыҡташ районындағы Һунарсы ауылына, килеп сыҡҡандай булдым. Шунда йәшәгән оло йәштәге Искәндәр бабайҙан бер легенда ишеткәйнек беҙ 1989 йылғы фольклор экспедицияһы ваҡытында. Уның буйынса ла, хан ҡарттарҙы үлтерергә ҡушҡас, бер зирәк егет атаһын йәшереп алып ҡала. Ҡайҙа күсенһә, шунда янында йөрөтә. Тик, Эллэйҙән айырмалы рәүештә, йөкләп түгел, ә арбаһының йәшерен бер ҡумтаһында. Шул арҡала сүллектә һыуһыҙ ҡалған халыҡ – һыу, аҙашҡанда юл таба. Нисек? Тәүге осраҡта ул: “Улым, бүгәй үгеҙҙе ысҡындырығыҙ. Ул ҡайҙа сапсынып, үкереп-үкереп тороп аяҡ аҫтын һөҙә башлай, шул ерҙе соҡоғоҙ – һыу табылыр“, – ти. Шулай итәләр – һыуға кинәнә күскенсе ҡәүем. Ә юлдан яҙғанда: “Улым, – ти, – алдығыҙҙа бер ҡорт (бүре) пәйҙә булыр. Шунан ҡалмағыҙ“, – ти. Эй һәм шул һүҙ раҫҡа сыға. Бүре-ҡорт артынан ҡалмай бара торғас, кешеләр Уралға килеп сыға. Шунда төпләнә. Шунан үҙҙәрен башҡорттар тип йөрөтә башлай булалар. Ни өсөн тигәндә, ҡорт (бүре) баш булып килгән бит. Шуға...

Саха легендаһында ла шулай булырмы тиһәм, уның сюжеты бөтөнләй башҡа яҡҡа һалдырып сыҡты ла китте.

...Шулай улынан йөкмәтелеп, күн ҡуржында тирләп-бешеп килгән Татаар Тайма бер ваҡыт:

– Улым, – тип әйтте ти, – берәй ус ҡына тупраҡ әпир әле.

– Була ул, атай, – тип, улы тупраҡ әпиргәйне ... Һуҡыр ҡарт шуны ни эшләткән икән тиһегеҙ? Ыуып ҡарамаған. Юҡ. Еҫкәп тә тормаған. Юҡ. Тәмләп ҡараған. Тәмләгән дә:

– Бына инде, улым, һиңә Өләүөнә лә Өләүөнә, тип һөйләгәйнем бит әле. Ана шунда килеп еткәнбеҙ икән, – тигән ти.

– Был һыуҙа ни ҡылырмын, атай? – тине ти Элләй.

– Балам, мин күпкә бармам. Һүҙемде васыят итеп ҡабул ҡыл. Мин үлһәм, эске күлдәгемдең яғаһының йөйөн ҡарарһың. Унда туғыҙ бөртөк кипкән eләк булыр. Шуны ал. Илдән ҡасып йөрөгәнемдә мин уны йылы диңгеҙ ярында йыйғайным. Асығып, быуының талығып китһә, шул eләктең береһен генә ҡапһаң да, үҙәгең ялғаныр, – ти. Татаар Тайма әжәле яҡынлашыуын һиҙеп, улына бүтән кәңәштәрен дә әйтеп ҡалдыра. – Хәле самалы кешеләреңде ошо тирәлә аҙаштырып ҡалдыр. Үҙең һал һалла. Һал һаллағанда, эре-эре булһын юнысҡылары. Үҙең, һалыңды ҡуҙғатып, аға башлағанға тиклем шуларҙы ағыҙ. Йәнә сытыр-мытыр бәйлә лә уларын да һыуға һал. Улары ла алдан аға торһон. Түбән яҡта кеше булһа, шуларҙы күреп, үрҙә кеше барын белер. Яҡынмы, алыҫмы икәнеңде лә аңлар. Өләүөнәлә Омоғай Баайҙы табырһың. Шунең ике ҡыҙы булыр. Шуларҙың береһен алырһың. Тағы бер кәңәшем бар, улым. Һин тәүҙә шул ике ҡыҙҙың тышҡа сыҡҡанын аңды. Кемеһенең кесе яраунының күбеге кәпәстәй булып ҡабара, шуныһын ал – түлле булыр, ырыуың үрсер, – ти ҙә күп тә үтмәй яҡты донъя менән хушлаша.

Элләй батыр атаһы әйткәнсә эш итә. Аңдып һайлаған кәләше Сыппай үрсемле була. Уның улының улы Тығын батырҙан үҙен саха тип атаған халыҡ тарала була...

Саха халҡының сығышын аңлатҡан этиологик легенданы тыңлағанда, юҡҡа ғына берсә Туймаадаға бәйле башҡорттоң Туймазы менән Туйбағыһы, берсә легендаһы, берсә экиәте иҫкә төшә бармаған икән. 1977 йылдың июнендә Якутскиҙа үткән Алыҫ Көнсығыш халыҡтарының эпик ижадына бағышланған II Бөтә Союз ғилми конференцияһына килгәнендә, күренекле фольклорсыбыҙ Мөхтәр ағай Сәғитовҡа әле беҙгә Захарова бәйән иткән легенданың бер версияһын ишетеү насип була. Григорий ағай Федоров һөйләүенсә, легенданың геройы Элләй башҡорт егете булған, Туймаада тигән исемде шул кеше ике улына туй яһаған урынға биргәндәр, ти. М.Сәғитов, был версияла хәҡиҡәт бар, тип өҙөп кенә әйтмәй. Әммә, булһа булыр шул, тигәндәй итә. Быны нимәгә таянып раҫлауымды белгегеҙ килһә, уның юлъяҙмаһындағы ошо һүҙҙәргә иғтибар итегеҙ: “Күренекле яҡут ғалимы В.К.Ксенофонтов 20-30-сы йылдарҙа Элләй тураһындағы риүәйәттәрҙе өйрәнгән һәм туплаған. Уның материалдары тик 1977 йылда ғына Мәскәүҙә “Эллэйыда“ исеме менән донъя күрҙе. В.К.Ксенофонтов йыйған риүәйәттәрҙә ысынлап та Элләй(Эллэй) бик алыҫтан, ситтән килгән батыр егет итеп һүрәтләнә“. (Мөхтәр Сәғитов. Ғүмерлеккә ҡалған яра: Хикәйәләр, юлъяҙмалар, фәнни-популяр мәҡәләләр.– Өфө, 1993. – 65-се б.).

Нисек кенә булғанда ла, Григорий ағай Федоровтың версияһы иғтибарға лайыҡ. Шул уҡ ваҡытта легенданың ҡайһы бер версияларында Элләйҙең “татар ханы улы“ тип йөрөтөлөүен дә иҫәпкә алыу зарур. (Ихтимал, ундай осраҡтарҙа әле беҙ килтергән версияла әйтелгәненсә, Элләй Татаар Тайма улы тигәнде күҙ уңында тотҡандарҙыр). Элек Рәсәй империяһында төркиҙәрҙе, беренсе нәүбәттә башҡорттарҙы, татар тип атау ғәҙәте булған сүрәттә лә һәм... шуның өсөн дә.

... Легенда бәйән ителгән арала, кемдәр ойоп нәүем баҙарына юл алмаған, шулар төркөм-төркөм булып гәпләшергә кеште. Ҡайһы берәүҙәр каютаның арғы башына өйөлөштө. Унда ҡара күҙлекле бер ир ниндәйҙер олонхоны көйләй башлағайны.

Ана тәүге көндө беҙҙе картиналар күргәҙмәһенә алып барған музыкаль фольклор белгесе А.С.Ларионова В.М.Гацкка һырынып уҡ ултырған да, катер моторының бер көйгә талғын ғына гөпөлдәүен, тулҡын шауын еңергә тырышҡандай, ҡыҙып-ҡыҙып, уға ниҙер аңлата. Ҡарттың әллә һөйләшергә бик үк дәрте килеп тормай, әллә әле генә

тыңлаған легенда һалған уйҙарҙан арына алмай. Йә баш ҡағыу менән генә сикләнә, йә күҙҙәрен йомоп-йомоп ала: эйе, эйе, йәнәһе. Ҡырғыҙ дуҫым Имелбей Молдобаев тәҙрәһе төбөндә генә сәпелдәшкән тулҡындарҙы күҙәтә. Ихтимал, был минуттарҙа ул үҙен Ысыҡкүлдә йөҙөп китеп барғандай хис иткәндер. Ә Польшанан килгән доктор-профессор Мария Кошко тәҙрә пәрҙәһенең ситен генә ҡайырып, берсә яҡынайып, берсә янтайып, артҡа елдереүсе арғы ярҙан күҙен алмай. Себер төпкөлдәрендә йәшәгән халыҡтарҙың мәҙәниәтендә архаизм менән яңылыҡтың нисек һыйышып йәшәй алыуын уйлап киләме, әллә алыҫта-алыҫта ҡалған Познанын һағыныуын тулҡындарға һөйләргә итәме? Белмәҫһең. Бына ул йәнләнә төштө. Ирекһеҙҙән мин дә тәҙрәгә күҙ һалдым. Беҙ бараһы ярҙа тәүҙә яңғыҙ ғына “уазик“ күренде. Был инде – әлеге Элләй ағыҙған юныҫҡылар кеүек, яҡын тирәлә кеше барлығына ишара ине. Әһә, яр ситенән үк ҡаршыбыҙға яҙыулы бағаналар йүгерешә башланы түгелме? Былары инде тәбиғәтте һаҡларға саҡырыуҙар: йә ут яҡмаҫҡа, йә лагерь ҡороп был тирәлә туҡталмаҫҡа киҫәтеүсе иҫкәрмәләр ҙа. Тимәк, ҡурсаулыҡ-музейға яҡынлашабыҙ. Һәм шулай булып сыҡты ла. Ана яр башында саҡырыусы яҙыу пәйҙә булды: “Нөрүөн норгуй! – Добро пожаловать!“ “Рәхим итегеҙ!“ була инде беҙҙеңсә.

Беҙҙе экскурсовод ханым ҡаршы алды: “Нөрүөн норгуй! Нөрүөн норгуй!“ Һәм шунда уҡ бик киң эҫкертте хәтерләткән ҡоролмаға етер-етмәҫтән музей-ҡурсаулыҡ хаҡында һөйләй ҙә башланы.

“Дружба“ тип аталған “Өлөүнә тарихи-архитектура музей-ҡурсаулығы“ ни бары ун өс йыл ғына эшләп килә икән. Ул хәҙерге Якутскиға нигеҙ булыр тигән ниәт менән төҙөлгән острог урынында асылған. 1632 йылда утыҙ юлдашы менән килгән Петр Бекетов төҙөткән острогты, һыу хәүефенән ҡурҡып, етмеш саҡырым өҫкә күсерергә мәжбүр булғандар( 2001 йылдың яҙында аяуһыҙ ныҡ ташҡан Өлөүөнә Саханың башҡалаһын һыуҙа йөҙҙөргәс, ағас ҡоролмаларҙан ғына торған асыҡ һауа аҫтындағы музейға ни хәтлем ҙур зыян килеүен күҙ алдына килтереү ҡыйын түгелдер). Ана шул тарихи урын зәңгәр күк сатыры аҫтында музей-ҡурсаулыҡ эшләүгә ярап ҡалған да инде. Музейҙың биләмәһе йөҙ илле гектар самаһы. Ундағы ҡомартҡы ҡоролмаларҙы, ашығып ҡарағанда ла, дүрт-биш сәғәт ваҡыт кәрәк тиҙәр. Көнләшмәҫ ерҙән көнләшмәле күренеш. Башҡортостанда бит бындай мәҙәни-тарихи музей булырға уйлағаны ла юҡ бит! Исмаһам, бер генә бөртөк булһа ла...Ә Саха илендә бындай музей өсәү икән. Шунан инде бындай музейҙы үҙебеҙҙә күреп өйрәнмәгән беҙҙәргә руссалап тороп: “Да-а...“ тип әйтергә генә ҡалғанын аңлай торғанһығыҙҙыр.

Беҙҙе иң әлек тыш яғынан ҡарағанда эҫкертте хәтерләткән ҡоролмаға алып инделәр. Ишегенең башына “Балаган – традиционное зимнее жилище“ тигән яҙыу ҡаҙаҡланған. Балаган – үҙе торлаҡ, үҙе музей экспонаты. Бәй, экспонаттың эсе тулы йәнә музей экспонаты имеш. Юҡ, һауыт-һаба, анау һоро айыу тиреһе ябылған кресло, кәштәләрҙә теҙелешеп ултырған ағас йә туҙ һауыттар ғына түгел, ҡап уртала ултырған дәү сыуал да, сыуал алдындағы көлдөксәлә ҡыя һөйәп ҡуйылған көлсәләр ҙә, табалағы ҡоймаҡтар ҙа, ағас шешкә теҙеп, ҡулдарыбыҙға тотторолған ваҡ балыҡтар ҙа, ағас һауыттарҙа мөлдөрәшкән ҡымыҙ ҙа, хатта, саха ризығын ауыҙ иттереп йөрөгән бынау милли кейемле ханым да... Ә инде ошо музейҙы төҙөүгә ер биргән Усталдан районынан килгән олонхоһуттар менән милли йырҙар башҡарыусы үҙешмәкәр йырсылар хаҡында әйтеп тораһы ла түгел.

Балаган тигәндәре, тыштан ҡарағанда эҫкертте хәтерләтһә лә, эстән ҡарағанда блиндажға оҡшаш ҡоролма булып сыҡты. Йыуан-йыуан таяуҙарға һалынған урҙаларға “һайғауҙың ағаһы, бүрәнәнең ҡустыһы“ тип әйтмәле йоморо ағастар йәйелгән дә дүрт яҡтан шундай уҡ йыуанлыҡтағы ағастар һөйәлгән. Тегеләре – түбә таҡтаһын, былары дүрт стенаны алмаштыра.

Киҫек пирамиданы хәтерләткән ошо ҡоролмаға тош-тош урындан бәләкәй генә дүрткел тишектәр уйылған да шунда рамһыҙ быяла ҡуйылған. Тәҙрә була

инде былары. Ҡоролманы тыштан ҡалын итеп балсыҡ менән һылағандар. Түбәһе лә һылаулы. Бына һиңә балаган. Иҙәне ер. Унда бесән түшәлгән. Ҡап уртала сыуалы. Уның тура тартмалы мөрйәһе (саң һурғысың ары торһон!) балагандағы төтөндө лә, еҫте лә, саңды ла һурып алып тора икән. Утынды һөйәп ҡуйып дөрләтеп яғып ебәреүең була – гөрләтеп тартып ала ла ҡуя икән.

Сыуал ауыҙынан өҫтәрәк – ылаш. Унда, беҙҙең ата-бабаларыбыҙ һымаҡ, ҡорот киптерә торғандарҙыр, балыҡ та ыҫлайҙарҙыр, ахырыһы... Стеналары һөйәлгән бүрәнәнән булмаһа, эсе үтә киң итеп эшләнмәһә, тәҙрәләр уйылмаһа, торғаны башҡорттоң элекке аласығы был балаган тигәндәре. Тик үтә иркен.

... Хәтеремдә, Бөйөк Ватан һуғышы мәле ине. Дүрт-биш йәштәремдә мин, Бибикамал апайыма иптәш булып, гел фермала йөрөй торғайным. Ферма Кәлтәгәү тигән йәйләүгә күсһә, беҙ аласыҡта көн итә инек. Унда ла сыуал. Унда ла ылаш. Ылашта һәр саҡ баш-баш итеп йомарланған ҡорот ята. Шунда ята-ята улар таш булып ҡата. Ҡыш көнө шуны ҡырып, иҙеп, һары май, борос һалып тороп эсһәң, ҡыш бабай яныңа яҡын юламай.

Саха балаганында ла ут янында йылыныр булғандар. Апайымдар ҙа, тана көтөп, ямғырҙа лысма һыу булып ҡайтып инерҙәр ҙә, сыуалды дөрләтә яғып ебәреп, шунда өйрөлә-сөйрөлә кибенерҙәр ине. Алмашҡа кейемдәре булмағас, ҡалай итһендәр... Кем уйлаған, саха еренә килеп, шул михнәттәрҙе иҫкә төшөрөрмөн тип...

Хәтергә хәтер ялғана.

...1995 йылда Гөлнур Хөсәйенова, Розалиә Солтангәрәева, Салауат Хөсәйеновтар менән Таулы Алтай республикаһында уҙған ғилми конференцияла ҡатнашҡанда Рәсәй Фәндәр академияһының Себер бүлегендәге филология институты директоры профессор Александр Бадмаев (оло үкенесебеҙгә ҡаршы, яңыраҡ ҡына вафат булып ҡуйған икән. Ауыр тупрағы еңел булһын! Гүре яҡты булһын!“), үҙе бүрәт булараҡ, милләтенең бер йолаһын атҡарып күрһәткәйне. Усаҡ янындағы кес кенә табынға ултырып, ризыҡты ауыҙ итер алдынан, ул рюмкаһын тотоп, ут янына барҙы. Тәүҙә, шул һауыттағы шарапты семтегәндәй итеп кенә алып, утҡа сиртте. Быны ул өс тапҡыр ҡабатланы. “Утты һыйлай“, – тинеләр, уның ҡыланышына аңлатма биреп. Шунан Күкте һыйланы, уң яғы менән һул яғын да буш ҡалдырманы. Шунан һуң ғына шарапты үҙе ауыҙ итте. Сахаларҙа ла шундайыраҡ йола бар икән. Балаганда беҙҙең өсөн сәй, ҡымыҙ, көлсә, балыҡ, ҡоймаҡ әҙерләгәндәр ине. Профессор Н.Е.Петров (ул үҙе тел белгесе) ҡулына башҡорттоң бормаһаһы (кубогы) кеүек итеп һырлап эшләнгән ағас һауыт тотоп, сыуал янына килде лә тамаҡ төбө менән саха телендә көйләп-көйләп, илгә-ергә именлек, рухтарҙың мәрхәмәт итеүҙәрен теләп, һамаҡлап торҙо-торҙо ла, дөрләп янған утты тәүҙә ҡоймаҡ менән һыйланы (бер-бер артлы утҡа ҡоймаҡ һелтәне), шунан өс тапҡыр ҡымыҙ тамыҙҙы. Мәжүси сахалар ут рухына бына шулай табыналар икән. Иғтибар итегеҙ, “боронғо“ тигән һүҙҙәрҙе ҡулланманым. Сөнки бабалары православие динен ҡабул итһәләр ҙә, музей экспонаты рәүешендә ҡоролған балаган йә урасаларында иконалар торһа ла, мәжүсилек, тәбиғәт рухтарына, Аҫҡы, Урта, Өҫкө донъя рухтарына, аҡ шаманға, ҡара шаманға инаныу башланғысы уларҙа әле лә көслө. Йәштәр араһында тәңрелек диненә саҡырыусы хәрәкәт башланыуы ла ниҙер хаҡында һөйләй буғай. Хәйер, бер аҙ ситкә киттем буғай.

Аңғарғанһығыҙҙыр, Александр Бадмаевтан айырмалы рәүештә, саха профессоры күкте лә, дүрт тарафты ла “һыйламаны“. Аҙаҡ ошо уҡ балаганда Усталдан улусының үҙешмәкәр артистары Петров бер тапҡыр күрһәткән йоланы концерттың бисмиллаһы рәүешендә атҡарғайны. Был осраҡта ла күк менән дүрт тараф “хәтергә алынманы“. Әммә, уның ҡарауы, Күкте иҫкә ала торған махсус йолаһы бар икән саханың. Ул йолаға тәүге көндө үк юлыҡтыҡ беҙ. Гуманитар тикшеренеү институтында олонхоһуттар сығышын тыңлағандан һуң ыҡсым ғына фуршет ойошторҙолар ҙа, оҙаҡ һуҙып тормаҫтан, бөтәһе лә залға атлыҡты. Шунда уҡ ҡултыҡлашып, устарын усҡа йомоп тотоноштолар ҙа, түңәрәк яһап, миңә тойолғанынса, ике-өс кенә нотанан торған һамаҡ

көйөнә тирбәлә-тирбәлә, гел уң аяҡты алдан йөрөтөп, берсә алға, берсә артҡа тартылып, сәғәт стрелкаһы йүнәлешендә әкрен-әкрен хәрәкәт итә башланылар.

– Был ниндәй хоровод? – тип һораныҡ беҙ.

– Оһоуһай! – тинеләр уйынсылар ғорурлыҡ менән.

"Нимәһе ғорурланырлыҡ икән инде?" – тип уйланым мин тәүҙә. Аҙаҡ иһә шуны белдем. Бына шулай, берсә башты эйә биреп, түңәрәк эсенә тартылып, берсә башты артҡа саңҡайтып, сигенгәндәй итеү тәүҙә Ергә, унан Күккә, тимәк Тәңрегә баш эйеүҙе аңлата икән. Хәҙерге ваҡытта ни яғы менәндер үҙебеҙҙең һабантуй байрамын хәтерләткән сахаҙың *Ысыах* тигән боронғо дини байрамдарының ритуал бейеүе рәүешендә барлыҡҡа килгән Оһоуһайҙың рухи нигеҙе тип тәңрелек дине, икенсе төрлө әйткәндә, *Айыы тәңре итәгәлә* (сағыштырығыҙ: *тәңре тәғәлә*) иҫәпләнә. Шуға күрә республиканың баш ҡалаһында Оһоуһай һарайы, Тәңрелек храмы, улустарҙа Оһоуһай йорто *Айыы йорто* төҙөү мәсьәләһе күтәрелеп ята икән бында. Шунан, саха ғорурланмай, кем ғорурланһын!

Бынан теүәл ун өс йыл элек һуғыш һәм хеҙмәт ветерандары *"Оһоуһай йәмғиәте"* ойошторған. Йәмғиәт ошо хороводты башлап йөрөүсе, йыр башлаусылар әҙерләүҙә ҙур уңыштарға ирешкән һәм хоровод бейеүе оҫталарын әҙерләү үҙәгенә әүерелгән. Шунан ни, йәнә саха ғорурланмай, кем ғорурланһын!

Оһоуһай – ЮНЕСКО-ның исемлегенә индерелгән берҙән-бер яҡут милли байрамы икән. Шунан ни, ғорурланмаҫ ерҙән ғорурланыр сахалар! Мәҙәни-дини әһәмиәтенән, халыҡтың поэтик, хореографик, музыкаль һәм йырсылыҡ сәнғәтен үҫтереүҙәге ҙур роленән тыш, оһоуһайҙың шундай бер хикмәтле яғы ла бар икән. Тикшеренеүселәр шуны асыҡлаған: оһоуһай гимнастика, аэробика кеүек үк, кешенең сәләмәтлегенә ыңғай йоғонто яһай, ти. Оһоуһайҙа ҡатнашыусылар, бер ҡыҙғанда, 10-15 саҡырым юл үткәндәгеләй, көсөргәнеш кисерә имеш. Шунан үҙҙәренең милли хороводы хаҡында ҡайһы саха ғорурланмайынса ғына әйтә алһын инде!

Бына әле лә үҙешмәкәр артистар сығыш яһап бөтөүе булды, балагандан сығыу менән, сахалар, ҡунаҡтарҙы ла әйҙәп, ҡулға-ҡул тотоношоп, ҡултыҡлашып түңәрәккә баҫтылар ҙа, "оһо-уһой" ҙан һалдырып, оһоуһайҙа әйләнә лә башланылар. Кафеларында ҡунаҡ күрһәткәндән һуң, автобусҡа тейәлеп киткәнсе, Якутскиҙың боронғо нигеҙ таштары зыңлап тормалы итеп йәнә оһуоһайҙа әйләнделәр ҙә әйләнделәр, йырланылар ҙа йырланылар. Ә йыр тигәнем тотошлайы импровизацияға ҡорола: йыр башлаусы ни күрә, ни уйлай, көйгә һалып, шуны бәйән итә. Әйткәндәй, ҡунаҡтар ҡатнашҡан был хороводта башлап йырлаусы ролен бая утҡа табыныу йолаһын күрһәткән профессор Н.Е.Петров атҡарҙы. Әлеге Оһоуһай йәмғиәте советының рәйестәштәренең дә береһе ул икән.

Сахалар ҡышын йәшәй торған балагандан йыраҡ түгел ғәләмәт ҙур һәм бик тә бейек ҡыуышты хәтерләткән бер ҡоролма тора. Ана шуны *ураса* тип йөрөтәләр ҙә инде. Эстән ул бер ни тиклем тирмәне хәтерләтә. Әммә тирмә кеүек тирелмәле түгел. Әҙәм буйынан саҡ ҡына бейегерәк, аралары 2,5 – 3 метр ҡалдырылып, түңәрәк буйынса ултыртылған бағаналар. Ырып, семәрләп биҙәрләнгән шул бағаналар, шундай уҡ итеп биҙәлгән урҙалар менән тоташтылырған. Шуларға, түңәрәп сыҡҡансы, аралыҡлы итеп, һайғауҙар һөйәлгән. Шулай ҡыуыш хасил булған. Әммә түбәһендә улар тоташмай, тирмәнең сағарағы (төндөгө) һымаҡ түңәрәк тишек хасил итә. Тик ул түңәрәктең туғыны юҡ. Туғын аҫтараҡ. Ҡыуыш ағастарының йыуан яғы ергә терәлеп әлеге бағана урҙаларына һөйәлә лә, остары шул өҫкө туғынға таяна. Бағаналар араһы, яңылыш ҡына һанамаһам, ун ике сектор хасил итә. Был яғы менән дә ул боронғо төрки-монгол тирмәһен хәтерләтә. Ул да шулай ун ике секторға бүленер булған. Тик бағанаһыҙ ғына. Тирмә ҡанаттары үҙҙәре үк бағана вазифаһын атҡарған. Шул ун ике сектор – йылдың ун ике айын кәүҙәләндергән. Урасала ла шул идея кәүҙәләнгәндер, моғайын. Урасаның уртаһында ҡалын таҡтанан көлдөксә буралған. Шул бурама уртаһына балсыҡ төйәлгән. Шунда аҫҡаҡ

ҡуйылған. Тәғәйенләнеше: шунда ут яғыла, аш бешерелә, сәй ҡайнатыла.

Секторҙарҙың һәр береһенә урындыҡ йәйелгән. Иң ситтәгеһе хеҙмәтсегә тәғәйен, уға етәгеһе – ир балаларға, башҡа ир-атҡа, һул яҡтағылары – ҡатын-ҡыҙ, ҡашығаяҡ өсөн. Унда турһыҡты, тырызды, батманды хәтерләткән һауыт-һаба ултыра ине.

Зәңгәр күк көмбәҙе аҫтындағы музейға төрлө улустарҙан тарихи-архитектура яғынан әһәмиәтле йорттарҙы күсереп ултыртҡандар. Борогон улусының Томтор тигән төбәгенән – тәүге мәктәп, Кычкин тигән писарь йорто, Мегин-Кангаласс улусының Чубучан тигән ерендә 1790 йылда төҙөлгән Копырин амбары, тағы әллә ниндәй ҡоролмалар килтерелгән. Улар байтаҡ. Иҫке ҡоролмалар менән бер рәттән реставрацияланған ҡоролмалар (Басов йорто, бағана башындағы бурамаға мәжүсисә ерләүҙе күҙ алдына килтермәле боронғо ҡәберлектәр). Элекке стилдә төҙөлгән яңылары ултыра. Мөһабәт ҡанаттарын елпеп әллә ҡайҙан уҡ үҙенә әйҙәп торған ел тирмәне иҫ-аҡылды алмалы үҙенсәлекле ҡоролма булып сыҡты. Боронғоларҙың был техник ҡаҙанышы халыҡтың ижади һәләтенә үҙенсәлекле һәйкәл кеүек ҡабул ителә.

Ә уның эргәһендәге Зашивер Спасс сиркәүе һуң! 1990 йылда реконструкцияланған был изге йорт 1700 йылда Индигирка йылғаһы буйында төҙөлгән булған. Сиркәү хәҙер ҙә үҙенең төп вазифаһын атҡармалы. Шуның менән бергә хәҙер ул тарихи музейҙы хәтерләтә. Бында боронғо славян, урыҫ телендәге дини китаптар менән бергә яҡутсаға тәржемә ителгәндәре лә бар. Стеналарҙағы һүрәттәр Саха илен православие диненә күндереү тарихын тасуирлай. Күренекле миссионерҙарҙың портреттары ҡәҙерләп һаҡлана. Ошонда уҡ үҙ теләге менән беренсе булып урыҫҡа, Рәсәй диңгеҙсеһе С.Дежневҡа, кейәүгә сыҡҡан саха ҡыҙы Абакаядаға бағышлап И.И.Попов тигән рассам төшөргән “Ирен көтөүсе Абакаяда“ һәм “С.Дежнев Боҙло диңгеҙгә китер алдынан ғаиләһе менән“ тигән картиналары, һыҙма мылтығын ике иңенә тиң һалып арып-талып килеүсе С.Дежневтың скульптур һыны тора.

Басов йорто этнографик экспозицияға бай. Унда һәр төрлө милли биҙәнеү әйберҙәре, боронғо һауыт-һаба, эйәр-өпсөн кеүек әйберҙәр тупланған.

Музейҙың ҡоролмалар рәүешендәге экспонаттары, шул экспонаттар эсендәге бай коллекциялар менән танышып сыҡҡас, Саха халҡының тарихы, этнографияһы, мәҙәниәте, дине, донъяға ҡарашы хаҡында ҡыҫҡа ваҡытлы курс үтеп сыҡҡандай булдыҡ. Улус артистары сығышы иһә шул курсты тағы ла йөкмәткелерәк иткәндәй тойолдо.

Музей менән танышҡан арала төш ауып та киткән имеш.

– Бөтәгеҙ ҙә кафеға! – тинеләр ҙә, инде үҙебеҙ бер тапҡыр үткән һуҡмаҡ буйлап кире яҡҡа алып киттеләр.

– Бәй, – тиештек беҙ. – Бында ниндәй кафе булһын?

– Ниңә? Асыҡ һауалағы музейҙың кафеһы ла зәңгәр күк аҫтында булыуы ихтимал.

Шулай баяғы йөрөгән һуҡмағыбыҙҙы кире ҡыуа торғас, киҫек пирамида өҫтөнә төҙөк пирамида ултыртылған һымаҡ тойолған бер ҡоролма алдына килеп баҫтыҡ. Эсенә ингәс, төшөндөк. Бәй, был бер юлы сахаларҙың традицион ураһаһы менән балаганын бер юлы кәүҙәләндереүсе стилләштерелгән ҡоролма имеш. Ҡыуыш кеүек сатыр. Әммә һайғауҙарҙан хасил булмаған. Эстән ҡарағанда, мүккә күтәрелгән, стеналарының бейеклеге ике—ике метрҙан саҡ ҡына ашыуҙыр, моғайын! Үҙҙәре алтау. Мөйөштәре лә алтау. Алты ҡырлы ҡәләм мени! Әммә өҫ яҡтары эскә ҡарай иңкеү. Түшәме сатыр кеүек ябылған. Уны алты бағана терәп тора. Стена һайын берәр тәҙрә, Яҡутстан тәбиғәтен тасуирлаусы пейзаж картиналары, болан, бүре баштары.

* * *

Зәңгәр күк көмбәҙен ҡыйыҡ иткән тарихи-архитектура музейы – үҙенең бөтә булмышы менән, боронғо оригиналлығын һаҡлағандары ла, реставрацияланғандары ла, яңы заманға яраҡлаштырылып стилләштерелгәндәре лә, улар өсөн ерҙең мул бүленеүе лә – барыһы, барыһы ла, Саха илендә боронғо тарихи, мәҙәни ҡомартҡыларға иғтибарҙың, уларға ихтирамдың һәр кимәлдә лә

ни тиклем ҙур икәнен бер ниндәй реклама һәм саҡырыу, өндәмәләрһеҙ ҙә, үҙҙәре үк, өнһөҙ телгә килеп, ҡысҡырып һөйләп торғандай тойолдо.

### 8. Ятһыраған яҡташтар

Конференция асыу тантанаһында Саха илендәге башҡорттар хаҡында әйткәнем — минең асыш түгел, замандаштарыбыҙҙың күренекле тарихсыһы Әнүәр Әсфәндиәровтыҡы. 1971 йылда ул "Совет Башҡортостаны" газетаһының 9 декабрь һанында "Яҡутстанда башҡорттар" тигән мәҡәлә менән сығыш яһаған. Шунда әйтелеүенсә, XIX быуаттың икенсе яртыһында өс меңләп башҡорт Саха иленә мәңгелеккә һөрөлгән булған икән. Вилюй округында – Александровск, Сәргәлгә йылғаһы тамағында – Сәргәләх, Сунтар улусында өс ауыл ана шул башҡорттар тарафынан нигеҙләнгән булған. Яҡут ҡәрҙәштәр яңы ерҙе үҙләштерергә ярҙам итмәһә, аяуһыҙ яҙмыш ҡосағына ташланған башҡорттар тиҙ генә мандып китә алмаҫ ине. Улар иғәнә йыйып, аҡса, мал-тыуар яғынан ҡараған үгәйһетелгән башҡорттарҙы.

Әнүәр ҡорҙашының яҙмалары менән яҡшы таныш булараҡ, 1977 йылда Саха иленә килгәнендә, Мөхтәр Сәғитов ул телгә алған милләттәштәребеҙҙең бөгөнгө вариҫтарының хәлен белешмәк була. Күренекле фольклорсыбыҙҙың был изге ниәтен урындағы етәкселәр хуплай. Һәм Мөхтәр ағайға уларҙың ярҙамы менән Саха иле буйлап сәйәхәт итеү бәхете тәтей. Уға, ысынлап та, теге мәлдә һөрөлгән милләттәштәребеҙҙең эҙенә төшөргә насип була. Сунтар районына барғанында, бында егермеләп башҡорт ғаиләһе йәшәүен ишетә. Ниндәй маҡсат менән йөрөүен белеп ҡалып, үҙҙәре үк килеп уны табыусылар ҙа була. Шундайҙарҙың береһе булған Сара атлы апай менән осрашыуын Мөхтәр ағай үҙенең юлъяҙмаларында былай тип телгә ала: "Беҙ уның менән күрешеп, оҙаҡ ҡына һөйләшеп ултырҙыҡ. Ул 1921 йылда Ново-Александровск ауылында Ғәлиулла Нариманов тигән указһыҙ мулла ғаиләһендә тыуған, яҡут мәктәбендә уҡыған, күп йылдар медсестра булып эшләй икән. Әсәһе Олекмала һөргөнсө ғаиләһендә тыуған булған.

– Беҙҙең олатай, өләсәйҙәребеҙ Уралдан килгән башҡорттар булған. Уларҙы ни өсөндөр күпләп-күпләп, бығаулап, этап менән ошо яҡҡа мәңгелеккә һөргөнгә ҡыуып килтергәндәр. Улар бер нисә ай буйына йәйәүләп, бик интегеп килгәндәр. Бик күп кешенең юлда үлеп ҡалыуы тураһында һөйләгәндәре иҫемдә ҡалған. Башҡортостанда, бәлки, беҙҙең нәҫелдәр ҙә барҙыр. Тик беҙ уларҙы белмәйбеҙ.

Беҙҙең Мачесмар ауылы 1938 йылда ғына таралып бөттө. Ауылыбыҙ бик матур ине, колхоз төҙөп йәшәнек. Унда хәҙер зыяратыбыҙ ғына ҡалды. Зыярат әле булһа ла бар. Үлһәк, шунда барабыҙ инде. Мәйетте шунда илтеп күмәбеҙ, үҙебеҙсә тәрбиәләп ҡуябыҙ, – тине ул.

Сара Кривошапкина-Нариманова апай үҙешмәкәр түңәрәктәрҙә актив ҡатнаша икән. Башҡорт, яҡут, рус телдәрендә йырҙарҙы оҫта башҡарыуы менән уның был яҡтарҙа даны таралған. Мин унан биш – башҡорт, шулай уҡ яҡут, рус халыҡ йырҙары өлгөләрен магнитофонға яҙып алдым" (Яҡутстан башҡорттарына сәйәхәт. – 66-67-се б.).

Ә инде шул уҡ район үҙәгендәге Әһлиулла менән Ҡаһарман тигән бер туған Насировтар янына йыйылған башҡорт ҡоронда Мөхтәр ағай улар ауыҙынан "Уйыл", "Йәмле Ағиҙел буйҙары", "Дим буйы", "Өфө" йырҙарын, шаян таҡмаҡтар яҙып ала.

Бер осрашҡанда Мөхтәр ағай Саха илендә үткән көндәрен хәтергә алғайны. Шунда әйтеүенсә, Сунтар улусындағы милләттәштәребеҙ табын артында фольклорсыбыҙҙың үҙен дә йырлатҡандар икән. Шул турала һүҙ сыҡҡас та, мин, моғайын "Каруанһарай" йырын башҡарғандар, тип уйлап ҡуйғайным. Ни өсөн тигәндә, уның ошо йырҙы яратып йырлауы көллөбөҙгә лә күптән мәғлүм ине. "Ине"нән һалдырып, әле үҙем шул турала яҙып ултырам, ҡолағым төбөндә һалмаҡ ҡына көйгә Мөхтәр ағайҙың бәрхәт кеүек баритоны яңғырай башлағандай тойолдо:

Айҡай ҙа ғына сайҡай керҙәр йыуа,
Һай, кем, керҙәр йыуғанда,
Талмаймы икән уның беләккәйҙәре,
Һай кем, сайҡағанда?
Күрше генә тороп, күрешә йөрөп,
Һай кем, күрешә йөрөгәндә,

Янмаймы икән унығ йөрәккәйҙәре,
Һай кем, кис ятҡанда?

Аҙаҡ ҡына, Мөхтәр ағайҙың сәйәхәтнәмәһен уҡығас ҡына, белдем: уның репертуары бай ғына булған икән. Урал һынлы ерҙән килеп, поляр һыҙат аръяғында ҡунаҡтың танһыҡ милли йыр яңғыратыуын тыңлап ултырған ирмен тигән ир азаматтарҙың да күҙҙәренән бөрсөк-бөрсөк йәш тамсылары тәгәрәүен күҙ алдыма килтереүем булды, ирекһеҙҙән тамаҡ ҡырып ҡуйыуымды һиҙмәй ҙә ҡалдым. Минең хәлемде һиҙеп, Мөхтәр ағайым:

- Минең моңға түгел инде. Халҡыбыҙ моңон, бабаларыбыҙ ватанын һағыныу тойғоһо хисләндерҙе уларҙы, – тигәйне, урынһыҙ булһа ла, аҡланғандай итеп тә, әлеге лә баяғы баҫалҡылығына барып та.

– Әлбиттә, әлбиттә, шулай булғандыр... Әммә Мөхтәр йырсының төшөп ҡалғандарҙан түгел икәне лә мәлғүм! – тигән булдым. Ул иһә ғәҙәтенсә тыйнаҡ ҡына көлөп ҡуйыу менән генә сикләнде.

Насировтар ойошторған ҡор сәйәхәтсенең хәтеренә ныҡ ҡына уйылып ҡалған икән. Үҙенең сәйәхәтнамәһендә Мөхтәр ағай уны ярайһы ғына ентекләп тасуирлаған: "Әһлиулла ағай бер аҙҙан:

– Ағиҙелкәйҙәрҙе, ай, кискәндә,
Бер йырланым ишкәк ишкәндә.
Бер йырланым, дуҫтар, бер иланым,
Тыуған илем иҫемә төшкәндә, –

тип оҙон көйгә йырлап ебәрҙе. Уны Ҡаһарман ағай алмаштырҙы. Йыр артынан йыр китте. Мин тиҙерәк магнитофонды ҡороп ҡуйыу яғын ҡараным.

– Уралдан килгән туғаным, бер йырла әле! – тип быуынға төшә башланылар. Йүнле тауышым булмаһа ла, ҡаршы килә алманым, "Шафиҡ"ты йырланым. Ул йыр менән дә ҡотолоп булманы, тағы берҙе йырлаттылар.

Гөлсирә Остабунаева апай:

– Эй, рәхмәт, энем. Һин беҙ йәш саҡта атай-инәйҙәр йырлаған йырҙарҙы иҫкә төшөрҙөң бит әле. Элек үҙе моңло, үҙе оҙон йырҙар йырлай инек. Хәҙер онотоп бөттөк, шаҡы-шоҡо таҡмаҡ ҡына ҡалып бара, – тине.

– Ҡайһы берҙә радио аша башҡортса йыр ишетәбеҙ, тик һүҙҙәрен отоп ҡала алмайбыҙ. Телде лә онотоп бөтөп барабыҙ инде. Хәҙер беҙ башҡорт, урыҫ, яҡут аралашып бөттөк. Ҡайһы өйгә инһәң дә — интернациональ ғаилә. Өйҙә күберәк яҡутса йә русса һөйләшәбеҙ. Балаларға, килен-кейәүҙәргә башҡортса өндәшһәң, аңламайҙар, – тип дауам итте Ҡаһарман ағай.

Осрашыу бик күңелле үтте" (72-се б.).

Мөхтәр ағайҙың юлъяҙмаһында әйтелеүенсә, ул һуғылып үткән Олекма тигән районда 70-се йылдарҙың урталарында һикһәнләп башҡорт ғаиләһе йәшәгән. Улар ҙа ата-бабалары моңон онотмаған була. Һәр хәлдә, фольклорсыбыҙға шунда йәшәгән Рәхимов Хәйрулла тигән башҡорт ағай "Йәмле Ағиҙел буйы", "Өфө", "Тәфтиләү", "Башмағым", "Наган", "Минзәлә" йырҙарын йырлап, көйҙәрен скрипкала уйнап ишеттерә.

Күптәрҙең хәтерендәлер әле, 1972 йылда Яҡут АССР-ы төҙөлөүгә 50 йыл тулыу уңайы менән Башҡортостанда Яҡут әҙәбиәте һәм сәнғәте декадаһы булып үткәйне. Яҡут артистары араһында РСФСР-ҙың атҡаҙанған, Яҡут АССР-ының халыҡ артисткаһы Феврония Баишева тигән хормейстер менән Яҡут АССР-ының атҡаҙанған артисы Геннадий Баишев та була. Шуны иҫтә тотоп, М.Сәғитов Якутскиҙа уларҙы эҙләргә тотона. Ныҡыша торғас, Ф.Баишеваны табып ала һәм уның менән һөйләшеп ултыра. Шунда артистка атаһы яғынан олатаһының башҡорт булыуын хәбәр иткән уға. Фольклорсыбыҙҙың Сунтар районына (хәҙергесә, улусына) башҡорттарҙы эҙләп барыуын хуплай һәм: "Мегино-Кангаласк, Амга, Олекма райондарына ла барһағыҙ, яҡшы булыр ине. Унда башҡорттар күп булырға тейеш, – ти. Һәм хормейстер булараҡ үҙенең ҡиммәтле күҙәтеүе менән дә уртаҡлашып: – Сунтар районы фольклорға бай. Бигерәк тә шул район яҡуттарында пентатоника элементтары йыш осрай. Ғөмүмән, яҡут халыҡ йырҙарына диатоника хас. Мин Сунтар яҡуттары йырындағы пентатоника элементтарын башҡорт йыры йоғонтоһонда тыуған күренеш түгелме икән, тип уйлайым", – тип өҫтәп ҡуя (59-сы бит).

Яҡташымдың юлъяҙмаһын яңынан ҡарап ултырғанда шул хәтергә төштө: Якутскиҙа саҡта урындағы башҡорттар тураһында һүҙ сыҡҡас, саха фольклор-

сыһы Надежда Дьяконова: "Башҡорттар Сунтар, Олекама тигән улустарҙа йәшәй. Университет профессоры Н.Г. Петров тәүгеһенән. Ул сахаса йырлаһа, йыры нисектер икенсерәк яңғырай. Минеңсә, башҡорттар кеүек һуҙыңҡырай шикелле ул".

Был профессор менән конференция иртәгә башлана тигәндә үк танышҡайныҡ. Ул үҙе республикала Оһоуһай йәмғиәте ойошторооуҙа әүҙем ҡатнашып, шуның етәкселәренең береһе булараҡ, "Бөйөк Туймаада өҫтөндә оһоуһай" тигән альбомға төшкән. Шуны миңә бүләк иткәйне. Мәгәр яҡынданыраҡ танышып, һин дә мин гәпләшеп ултырыуға форсат сыҡманы. Оло ғына йәштә булһа ла, беҙҙең БДУ профессоры Нәғим Ишбулатов һымаҡ, йыр-моңға маһир икәнен танытып өлгөргәйне. Мин күрергә, ҡатнашырға насип булған оһоуһайҙарҙа гел ул башлап йырлауҫы ролен атҡарҙы. Теле, көйө ят булһа ла, тауышы, моңо бар икәнен айырыуы ҡыйын түгел ине.

Ошо урында йәнә бер хәтирә: "Мине ҡағыҙ битенә төшөр әле!" – тип үтенгәндәй булды. 1992 йылдың көҙөндә Баймаҡта фольклор буйынса семинар үткәреп йөрөгәндә, күренекле музыка белгесебеҙ Фәрит дуҫым Камаев менән һөйләшеп ултырғайныҡ. Һүҙ эйәрә һүҙ китте лә, һүҙебеҙ осо оҙон көй яҙмышы, өзләү сәнғәтенә килеп олғашты. Шунда ул: "Әхмәт ағай, в принципе, һәр башҡорт өзләй ала, һәр башҡорт оҙон көйгә йырлай ала. Экперимент ярҙамында иҫбатланған был. Былдай маһирлыҡ гендар аша бирелә. Өзләү сәнғәтенә эйә булған, оҙон көй йырлаған халыҡтарҙа тауыш, көй сығара торған туҡымалар бөтөнләй икенсе төрлө була". Бушҡа ғына иҫкә төшмәгәндер был һүҙҙәр. Теле үҙгәрһә лә, йөҙө үҙгәрһә лә, Саха ғалимының моңонда башҡортлоҡ ҡалыуына, Фәрит дуҫым әйтмешләй, гендар сәбәпселер, моғайын.

Илдән ситкә сығып йөрөгән кеше өсөн яңылыҡ түгел. Башҡортостан менән Татарстандан алыҫҡараҡ китһәң, татар ни ҙә башҡорт ни, тип ҡарай башлайҙар. Урындағы халыҡ ҡына булһа, бер хәл – улар үҙҙәре үк шулай ти. Һәр хәлдә, башҡортҡа хас ҡараш был. Боронғо яҙмалар, рәсми ҡағыҙҙар менән эш иткеләгән кешеләргә шул да мәғлүм: Рәсәй тигән империяла төркиҙәр элек татар тип кенә аталған: хакас – Абакан татары, төмәндәр – Себер татары, башҡорттар – Урал татары. Әҙри ҙә, нуғайы ла, малкары ла, ҡарасәйе, башҡаһы ла татар (әйткәндәй, бөгөнгө көндә Татарстанда яҙылған бәғзе хеҙмәттәрҙә, шул иҫәптән диссертацияларҙа, беҙҙең хаҡта һүҙ сыҡһа, "башҡорттар" тиәһе урынға, беләһегеҙме, ни тиҙәр? "Иҙел-Урал төркиҙәре", тиҙәр. Бөттө, китте – вәссәләм. Шул иҫке традиция Саха илендә лә һаҡлана. Йылын, көнөн генә әйтә алмайым, БДУ-ла ниндәйҙер бер кәңәшмә алдынан бер күн ишек алдында өйкөлөшөп торғанда рус совет әҙәбиәте кафедраһы мөдире профессор Вера Сергеевна Синенко ошондай хәбәр һалғайны: "Егеттәр, беләһегеҙме? Якутияла, оказывается, борондан уҡ башҡорттар йәшәгән. Һуңғы тапҡыр халыҡ иҫәбен алғанда өс мең башҡорт, башҡортлоғон онотоп, татар булып яҙылған, ти". Был мәғлүмәтте ул ҡайҙан алғандыр, һорашырға форсаты юҡ ине. Бәлки, Ә.З.Әсфәндиәров тапҡан мәғлүмәттәр менән хәбәрдар булғандыр. Ә бына М.Сәғитов үҙенең сәйәхәтнамәһендә 1970 йылда халыҡ иҫәбен алған саҡта Саха илендә 7679 кешенең татар булып яҙылыуын асыҡлаған ине. Ошо һанға төртөлгәс ни кисергәнен ул шулай тип хәбәр иткәйне үҙенең әлеге юльяҙмаһынла: "Яҡутстанда йәшәүсе татарҙар сығышы менән кемдәр икән, тигән уй ҡапыл келт итеп башыма ҡунды. Ни өсөн тигәндә, Октябрь революцияһына тиклем күп кенә төрки халыҡтары бер үк "татар" исеме менән аталып йөрөгәнәлектәре тарихтан билдәле. Һөргөнсө башҡорттар татар аталып йөрөмәйҙәрме икән, тигән уй минән китмәне" (54-се б.). Һәм Сахаға сәйәхәте ваҡытындағы осрашыуҙар, архивта тапҡан мәғлүмәттәр уның бушҡа ғына шөбһәләнмәүен иҫбатлаған.

Иҫәпһеҙҙең ҡуйы теүәл, тигән боронғолар. Халҡыбыҙ иҫәпле генә! Ләкин теүәл микән һуң ул иҫәп? Чита, Иркутск, Саха, Төмән, Бүрәт, Сахалин төбәктәрендә лә, алыҫ һәм яҡын сит илдәрҙә лә бөгөн булһын үҙенең милләтен айыра алмай аҙапланған йәки этник сығышына хуш күңел менән ҡараған күпме

ҡәрҙәштәребеҙ бар. (Хәйер, республикабыҙ эсендә, йә уның эргә-тирәһендә генә йәшәп тә, үҙенең милли сығышы менән иҫәпләшмәүселәр барында уларға ни һан!).

Ауылдашым Зәйтүн ҡусты Һибәтуллин Балтик флотында хеҙмәт иткәйне. Ҡыҫҡа ваҡытҡа ялға ҡайтҡанында:

— Әхмәт ағай, Балтиктағы бер утрауҙа башҡорттар йәшәй, — тигәйне.

— Булһа, булыр. Салауат яуы баҫтырылғас, шул яҡтарға ғүмерлеккә каторгаға ебәрелгәндәр ҡырылышып бөтмәгәндер, моғайын. Затын да ҡалдырыусылар булыуы ихтимал. Салауат яуына тиклем дә, унан һуң да әҙ башҡорт ебәрелмәгәндер ул тарафтарға, — тигәйнем ул саҡта. Әле лә ошо фекерҙә ҡалам. Әлдән-әле Үзбәкстанда, Ҡаҙағстанда, Читала, Улан-Удэ һәм Себерҙең бүтән тарафтарында ауыл-ауыл, йә урам-урам булып ултырған башҡорттар хаҡында ла имеш-мимештәр ишетелеп ҡуйғылай. Бараһы ине лә барлайһы ине шуларҙы.

Сахалағы ҡәрҙәштәр хаҡындағы һүҙҙе дауам итәйек. Мөхтәр Сәғитов менән Әнүәр Әсфәндиәров телгә алған башҡорттарҙың бөгөнгө вариҫтары менән беҙгә лә осрашыу насип булды. Беҙ тәүге көндә үк Николай Баишев тигән олонхоһутҡа иғтибар итә ҡуйғайныҡ. Фамилияһы ғына түгел, буй-һыны, йөҙө, хатта мыйығы ла сәбәпсе ине быға. Буйға буйсан: башҡа олонхоһуттарҙы аша ҡарап ултыра, асҡағыраҡ йөҙлө. Мыйығына тиклем: “Мин – башҡорттоҡо“, – тип бик йәтеш кенә йәпләшеп тора.

Икенсе көндө, солаһын тура килтереп, уның менән һөйләшеп ултырҙыҡ. Шул әңгәмәбеҙҙе һүҙмә-һүҙ теркәйем:

*Ә.С.* Баишев тигән кешеләр Башҡортостандан булырға тейештер?

*Н.Б.* Шулай тигәнде ишеткән бар. Был фамилияны йөрөтөүселәр Якутскиҙа ғына ла байтаҡ. Яҡут өсөн традицион фамилия түгел был.

*Ә.С.* Шәжәрәң менән ҡыҙыҡһынғаның юҡмы?

*Н.Б.* Юҡ шул, – шулай тине лә Николай, бер аҙ тын ултыра биргәс, өҫтәп ҡуйҙы, – өйрәнергә кәрәк ине. Былай, әгәр башҡорт кешеһен күрһәм, туғанымды күргәндәй булам. Беҙҙә башҡорттар Олекма улусында күп йәшәй. Унда ҡалала тотош татар-башҡорт урамдары бар.

*Ә.С.* Олонхо башҡарыу менән күптәндән шөғөлләнәһеңме?

*Н.Б.* Ике генә йыл. Беҙ бит образдар, ролдәр буйынса йырлайбыҙ. Түбәнге донъя батырҙарының береһенең ролен мин башҡарам.

*Ә.С.* Ә һөнәрең буйынса, Николай, һин кем булаһың?

*Н.Б.* Хәҙер мин ирекле рәссам. Картина яҙам. Әлегә күргәҙмәләрҙә ҡатнашып өлгөрмәгәнмен.

Асыҡ һауалағы музейға барғанда кемдер:

– Ә бит беҙҙең директорҙың урынбаҫарының да тамырҙарында башҡорт ҡаны тиртә, – тигәйне.

– Ҡайһы урынбаҫары? – тинем мин ҡыҙыҡһыныуымды тыя алмай.

– Һуң, конференцияла директор исеменән сығыш яһаны бит. Ана шул.

– Махаров Егор Михайловичты әйтәһегеҙме?

– Эйе, эйе. Ул философия фәндәре докторы. Профессор. Социаль фәндәр академияһының академигы.

Солаһын тура килтереп, быныһын да тоттом. Уның менән дә әңгәмәбеҙ оҙон булманы. Уныһын да, түкмәй-сәсмәй, һеҙгә еткермәксемен:

*Ә.С.* Егор Михайлович, һеҙҙе башҡорт затлы саха тиҙәр. Шул хаҡмы әллә нахаҡмы?

*Е.М.* Мин йәшерәк саҡта наслег бабайҙары шулай ти торғайнылар шул. Беҙҙең яҡҡа ҡасандыр бер башҡорт килеп юлыҡҡан. Ҡайһы быуыныбыҙҙыр инде. Элек бит шәжәрә тигән нәмәгә иғтибар итеүсе булманы. Олатай-өләсәйҙәребеҙҙең тамырын юлламаныҡ. Ҡайһы берәүҙәр уларҙың исемдәрен дә белмәй үҫте. Үлеләренең генә түгел, тереләренең дә...

*Ә.С.* Мин һеҙҙең менән тулыһынса килешәм: шулай булды...

*Е.Н.* Ҡарттар, һинең затың бер башҡорттан килә, ти торғайнылар. Минең әлеге фамилия – боронғо фамилия түгел. Ысын фамилиям Трофимов булған минең. Атай яғынан олатайҙы ни өсөндөр Махар тип йөрөткәндәр. Ҡушаматы шулай булдымы икән. Ул үлгәс, уның хөрмәтенә фамилиябыҙҙы Махаров тип алмаштырғандар.

Якутскиҙа “Яҡташ“ тигән татар-башҡорт йәмғиәте эшләп килә икән. Уның менән гәйнә ырыуы башҡорто Асия Хәтмулла ҡыҙы Клепцова етәксе-лек итә. Асия ханым менән Шәфҡәт Тутаевтың бер әңгәмәләшеүенә шаһит булғайным. Шуны ла юлъяҙмама теркәмәксемен:

*Ш.Т.* Асия Хәтмулловна, башҡорттар күпме бында?

*А.К.* Йәмғеһе бында өс меңдән ашыу башҡорт бар.

*Ш.Т.* Байтаҡ икән шул.

*А.К.* Әммә эш һанда ғына түгел, әүҙемлектә. Халыҡ ауыр ҡуҙғала. Теләгән ваҡытта йыйып алып булмай. Балаларҙы үҙ әсә телендә уҡытырға ине — булмай. Килеп сыҡмай.

*Ш.Т.* Министерство менән мөнәсәбәт нисек?

*А.К.*Беҙҙең өсөн һәр ерҙә лә юл асыҡ. Мәктәп асырға ла була. Рөхсәт итәләр. Бөтөн башҡорттарҙы бер мәктәпкә йыйыуы ғына ауыр. Иғлан биреп, асып ҡараныҡ: бер кеше, ике кеше килә. Воскресная школа тураһында һүҙ бара. Иң мөһиме – уҡытыусы юҡ. Үҙ телен яҡшылап белгән уҡытыусы юҡ. Шуға күрә министерствоны ла, хөкүмәтте лә ғәйепләп булмай.

Общиналар йылына бер йыйыла ине. Улар хәҙер юҡ. Общиналар Якутскиҙа ҡағыҙҙа ғына ҡалды. Олекма районында – төп башҡорттар. Татар тип яҙылһалар ҙа. Уны «татарский район» тип йөрөтәләр. Унда барып татар, башҡорттар менән осрашҡайным инде. Үҙемдә ниндәй материал бар әҙме-күпме, шуларҙы алып барғайным. Татар, башҡорт ҡоролтайҙары хаҡында һөйләнем.

*Ә.С.* Бында мосолман зыяраты бармы?

*А.К.* Татар-башҡорт зыяраты бар. Уны баҡсаларға кәрәк, тип ҡала башлығына яҙғайным: “Нисек оялмайһың? Һинең йәмғиәтеңдә 20 мең татар-башҡорт. Нисек инде һин үҙ зыяратығыҙҙы үҙегеҙ рәткә килтерә алмайһығыҙ!?“ – тинеләр. Ә татар-башҡортҡа бер ни ҙә кәрәкмәй.

*Ш.Т.* Республикала хәҙер ата-әсәләр көнө үткәрелә, шунда зыяратҡа баралар. Хәҙер урыҫтар ғына түгел, мосолмандар ҙа бара.

*А.Х.* Ой, минең йүгереүҙәрем. Ой, минең субботниктарым бында яһаған! Аллаға шөкөр, әбей-бабайҙарым килә, таяҡтарына таянышып. Ә йәштәр, ир-ат килмәй. Әбей-бабайҙар ғына килеп таҙарта.

Иртәгә ҡайтабыҙ тигән көндө тағы осрашырға һүҙ ҡуйышҡайныҡ. Беҙҙең эш көнө тығыҙ уҡ булырын белгән икән – иртәнге аш ашап сығыуыбыҙға Асия Хәтмулла ҡыҙы килеп тә еткәйне. Беҙ сыға килеп бер автомашина туҡтаттыҡ та, ҡайҙа-ҡайҙа барыуыбыҙҙы аңлатҡайныҡ, хужаһы беҙҙе йөрөтөргә риза булды. Гуманитар тикшеренеүҙәр институты тапҡырынан ҡуҙғалып китеп, яҡуттарҙың драма театрын, хөкүмәт йортон, Ленин майҙанын үтеп киттек. Һулда ҡайҙандыр һерәйеп сығып торған телебашня ла артта ҡалды. Шунан тарыраҡ урамдар буйлап берсә уңға, берсә һулға борғоланып килә инек – тап-таныш ергә килеп сыҡҡандай булдыҡ. Ни өсөн шулай икән, тип яҡшылап ҡараһам, алдыбыҙҙа ғына мөһәбәт манара һерәйеп тора, күккә ашырҙай булып. Бынауындай поляр һыҙат артында мәсет манараһын күреү үҙе бер мөғжизә икән ул.

Беҙ тиҙ генә автомашинабыҙҙан төшә һалдыҡ та ҡапҡаға йүнәлдек. Шофер көтөп торорға вәғәҙә бирҙе. Мәсеттең тирә-яғы ҡойма менән уратылһа ла, ҡапҡа тигәнебеҙ шартлы ғына ине. Ул ябыла-бикләнә торғандарҙан түгел. Кил, елдереп килеп ин, әйҙә. Матур булып, ҡалаға өр-яңы бер йәм өҫтәп манараһы һерәйеп торһа ла, мәсет үҙе әҙер түгел икән әле. Аяҡ аҫты тулы кирбес һынығы, ҡом, ҡырсын.

Беҙҙе, көлөп-йылмайып, үҙем менән рәттәш, ләкин минән мыҡтыраҡ кәүҙәле бер ир ҡаршыланы. Көмөрө танауына, бөҙрәләнеп торған ҡаштарына, үҙен тотошона ҡарағанда, Кавказ кешеһе икәне әллә ҡайҙан уҡ танылулы ине уның. Беҙ:

– Әссәләме ғәләйкүм! – тигәс, бары хөрмәт өсөн генә сырайында уйнаған йылмайыуы ҡапыл балҡышҡа әүерелде.

– Вәғәләйкүм әссәләм! – тине ул һәм өсөбөҙ менән дә ҡушҡуллап ихлас күрешеп сыҡты.

– Бына был ағай Хәлим хажи Аушев була. Беҙҙең күҙ терәгебеҙ, – тип та-

ныштырҙы Асия Хәтмулла ҡыҙы уның менән. Беҙ иһә һәр беребеҙ үҙ исемебеҙҙе әйтеп сыҡтыҡ. Башҡортостандан килгән мосафирҙар икәнебеҙҙе белеп алғас, Хәлим хажи:

– Һо, улай булғас, һеҙ беҙҙең Рәхимов дуҫтың иленән инде? – тине.

– Әллә һеҙҙең Рәхимов менән осрашҡанығыҙ бар инеме? – тинек.

– Юҡ та, – тине беҙҙең яңы таныш, – беҙҙең Президенттың дуҫы. Шуға ул минең дә дуҫым.

– Әйткәндәй, Президент Руслан Аушевҡа берәй яҡынлығығыҙ бармы? Әллә фамилия буйынса аҙаштар ғынамы? – тип һорамай түҙмәнек. Хәлим хажи Ингуш иле Президентын телгә алғас:

– Яҡын ғына ҡәрҙәшемен, – тип әйтеү менән сикләнде лә был яҡтарға кәсеп итергә теләү килтереүен һөйләүгә күсте. Шунан беҙҙе мәсет менән таныштыра башланы.

Мәсеттең оло бинаһы менән йәнәш кенә тәһәрәтхана, мәйет тәрбиәләй торған ҡоролма бар. Мәсет үҙе тыштан бик мөһабәт булмаҡсы. Булмаҡсы тим, сөнки манараһы әллә ҡайҙан күренмәле булып ялтырап торһа ла, үҙе тыштан матурлауға мохтаж әле. Ваҡытлыса һалынған һикәлтәнән күтәрелеп, мәсеттең эсенә үтәбеҙ.

– Бисмиллаһир рахманир рахим!

– Бисмиллаһир! – тип ҡабатлай хажи. – Яҡуттарҙы ҡырағай халыҡ кеүек күреүселәр бар. Яҡут, беҙгә ҡарағанда, таҙараҡ ул. Ошо мәсет тотҡаһында “Бисмиллаһир рахманир рахим!“ тигән яҙыу тора ине. Бер яҡут килде лә: “Бында нимә тип яҙылған ғәрәп хәрефтәре менән?“ – тип һораны. Тәржемә итеп ишеттергәйнем, бәй, был ни ти: “Надо ручку заменить“, – ти.“Ниңә?“ – тим. “Потому что тәһәрәт нету, а за ручку берутся“, – ти яҡутым. Ҡарале, мулла иғтибар итмәгән, аллаһыҙ иғтибар иткән!

– Яҡуттар ҙа мәсеткә йөрөймө әллә? – тим.

– Килеп-килеп китәләр. Үҙебеҙҙең мосолманды саҡырып килтереп булмаған саҡтар була. Былар ҡыҙыҡһына. Урамда осраһалар ҙа: “Как там наш мечеть?“ – тиҙәр.

– Исламға күсергә теләгәндәре тойолмаймы?

– Тойолмаған ҡайҙа! Аллаға шөкөр, ундайҙар ҙа бар. Берәү мәсеткә йөрөнө-йөрөнө лә, уҡырға өйрәнде. Ислам юлы менән китте. Хәҙер Мәскәүҙә уҡый. Уға Абдулғәлим тигән ат ҡуйҙыҡ. Бер яҡут үҙенә-үҙе Шамил тигән исем ҡушты. Тағы бер яҡут, дөрөҫөрәге, яртылаш яҡут егете бар: атаһы Балтик диңгеҙе яғынан, әсәһе – яҡут ҡыҙы. Уға Исрафил тип исем ҡуштыҡ.

– Ә үҙҙәре, Рәсәй баҫып алғандан һуң, православиены ҡабул иткәндәр икән. “Дуҫлыҡ“ тигән тарих һәм архитектура музейындағы балаганда ла, урасала ла металға сүкеп эшләнгән иконалар тора ине.

– Торалыр, торалыр. Ләкин яҡут, асылда, мәжүси булып ҡалған. Үҙҙәре менән һөйләшкәндә, ислам менән таныштырам. “Һеҙ бит аллаһыҙҙар: мәжүсиҙәр, шаманистар. Ысын христиан, исмаһам, ауыр саҡта: “О, Боже, помоги нам!“ – ти. Ә һеҙҙең илаһи бер ниегеҙ ҙә юҡ. Төрлө тәбиғәт рухтарына инанаһығыҙ, шуларға ғына табынаһығыҙ“— тим. Күптәре килешә: “Эйе шул“, – ти.

Мәсеттең эсе иркен, яҡты. Иҙәндең бер өлөшөнә генә келәм түшәлгән.

– Әле эшләйһе эш күп, – ти Хәлим хажи.

– Бынауы хәтлем матур йортто нисек төҙөнөгөҙ? – тип ҡыҙыҡһынабыҙ.

– Нисек булһын инде. Кеҫәлә бер тин юҡ көйөнсә, Аллаһы тәғәләнең ярҙамы менән генә! Мосолман дәүләттәренең бөтәһенә лә хат яҙҙыҡ, ярҙам итегеҙ әле, поляр һыҙат аръяғында тәүге тапҡыр мәсет төҙөлә, тип...

– Һалҡынлыҡ алтмыш градустан үткеләгән ерҙә... Мәңгелек туңлыҡ өс йөҙ метр тәрәнлеккә етә яҙған ерҙә...

– Эйе, эйе. Уныһын да әйттек үҙебеҙҙең мөрәжәғәт-үтенесебеҙҙә. Бизнесмендың фәләне тегендә ярҙам итә, төгәне – фәлән ерҙә, тип яҙалар. Беҙгә яҡын килеүсе лә, белешеүсе лә булманы. Ҡайһы бер мосолман дәүләттәре Мәскәүҙә төҙөлгән храмға мәрмәр оҙатты, беҙҙе иһә иҫкә алыусы ла булманы. Ярар, Алла ярҙамынан ҡалдырмаһа, төҙөп бөтөрбөҙ әле.

– Амин, шулай булһын! Изге эшегеҙҙе Алла ярҙамынан ташламаһын!

Шулай тинек. Башҡаса нисек йыуатаһың инде поляр киңлеген ислам

нуры менән нурландырырға тырышып ятҡан был Алла бәндәләренә. Бәлки ошо юлдарҙы уҡығас, үҙебеҙҙең яҡта йәшәүсе кеҫәләре ҡалын мосолмандарҙа миһырбанлыҡ тойғоһо уянып, уларға матди ярҙам итеү теләге лә тыуыр. Ә бит географик арауыҡ йәһәтенән ер аяғы ер башында ятһа ла, рухи яҡтан да, тамырҙарыбыҙҙы юллағанда ла, яҡын бит был яҡ. Был хаҡта ныҡ ҡына уйландырҙы. Ә уйланырға мосолман зыяратына барыуыбыҙ ҙа сәбәпсе булды.

Бая урамда тотоп алған автомашинабыҙҙың хужаһы вәғәҙәһендә тора торған кеше булған икән. Беҙ мәсеттән сыҡҡансы көтөп торған. Елдереп кенә мосолман зыяратына килтереп тә еткерҙе. Зыярат ҙур ғына. Унда барып ингәс тә иң тәүҙә шул күҙгә ташланды. Төптә бейек кенә бетон стела тора. Унда Бөйөк Ватан һуғышында ҡатнашып, бында килеп, мәңгелек төйәк тапҡан ҡәрҙәштеребеҙҙең исемдәре уйып яҙылған таҡтаташтар ҡуйылған.

– Быны, – ти Асия Хәтмулла ҡыҙы, – Бөйөк Еңеүҙең илле йыллығына ҡала мерияһы ҡуйғайны. Рәхмәт инде уның етәкселәренә!

– Зыярат күптәнгегә оҡшай. Баҡсалары күптән сереп, таштары ығып төшкән, ер менән тигеҙләнеп йә убылып ятҡан ҡәберҙәр күренә, – тигәс ул:

– Зыяратҡа өс йөҙ йыллап бар тиҙәр, – тине.

Бында Исмәғилев, Рәхмәтуллин, Еникеев фамилиялары йыш осрай.

Яҙмыш кемдәрҙе генә килтереп һалмаған тиһең. Исемдәре хәҙер инде йырға, риүәйәткә күскән, Шаһи Бараков, Буранбай, Йүркә Юныс кеүек башҡорт ир-азаматтары ла әҙ түгелдер улар араһында. Ихтилалдар баҫтырылғас, батша ғали йәнәптәре тарафынан һөргөнгә ебәрелгәндәрҙең дә, Сталин дәүерендә сәйәси золом ҡорбаны булғандарҙың да, кулак тигән ярлыҡ тағылғандарҙың да ҡайһы берҙәре һуңғы төйәген ошонда табыуы ихтимал. Иркен тормош, оҙон аҡса артынан килеүсеһе лә, кәсепсеһе лә барҙыр... Әйтеүҙәренсә,бында элек гел башҡорт менән татарҙар ғына ерләнгән. Хәҙер инде мосолман булған башҡа халыҡ вәкилдәре лә урын бүлешкән. Ҡәбер таштарындағы яҙыуҙарҙың бәғзеләре бында урыҫ фамилиялы кешеләрҙә һуңғы төйәген табыуын хәбәр итә. Күрәһең, элек тә бында исламға ылығыусы христиандар әҙ булмаған. Улары кем булды икән? Сахамы, урыҫмы? Нисек кенә булғанда ла, беҙҙең тарихыбыҙҙың әлеге йүнләп өйрәнелмәгән бер өлөшө, тос өлөшө, ошо Саха иленә килеп олғаша булыр. Уралын бер күреп, Ағиҙелен, Һаҡмарын, Эйеген, Үҙәнен, Эҫемен, Әйен, Ҡариҙелен бер уртларға зар булып, һуңғы һулышын алып, күҙен мәңгелеккә йомғансы, башҡаһын иҫләмәгәндә лә, ошо хаҡта уй йөрөтмәй ҡалмағандарҙыр кеүек тойолдо был изге ергә килеп үҙебеҙҙең фарыз мосолманлыҡ һәм кешелек бурысыбыҙҙы атҡарып, һеҙҙең исемдән дә зыярат ҡылғанда, улар рухына аят уҡытҡанда, ҡәҙерле яҡташтарым!

* * *

Якутск ҡалаһына ҡайһы тарафтан барып керһәң дә, юл буйында яңғыҙар, йә икешәрләп, йә өсәрләп ултыртылған матур-матур бағаналар күҙгә ташлана. Матур. Сөнки һырлап-һырлап, биҙәрләп, биҙәп эшләгәндәр. Уларҙың баштары йә нескә билле кувшинды, йә сәйнүк ҡапҡасының йоморсаҡлы тотҡаһын хәтерләтә. Бындай бағаналарҙы “Дуҫлыҡ“ тигән тарих һәм архитектура музей-ҡурсаулығында ла күргәйнек. Ундағылар тарих һөйләүсе вазифаһын атҡара: уларға металдан таҡталар беркетелгән, шул таҡталарҙа Саха ере элек нисек булған, шул турала риүәйәттәр, был яҡтарҙы Рәсәй нисек үҙләштерә башлаған, шуның тарихы яҙылған.

Был бағаналар – ябай бағаналар түгел икән. Уларҙы *һәргә* тип атайҙар икән. Уларға ат бәйләр булғандар. Музейға, ҡалаға инер ерҙә күреп, уларҙың шул тәғәйенләнешен ишеткәс, күңелгә ниндәйҙер аңлатып биргеһеҙ хис килеп тығылды. Бәй, сахалар ҙа башҡорттар һымаҡ фекерләй икән дә. Хәтерегеҙҙәме, башҡорт, ниндәй һыуҙы һыулаһа, бер үк йырҙы, шул һыуҙың исеменә ябаҡлаштырып, йырлар булған. Бөрйән ҡәбиләһенең Төйәләҫ буйын төйәк итеүселәре ҡасандыр:

Төйәләҫкәй буйы бигерәк йәмле
Аҡ тирмәләр ҡороп йәйләргәү.
Ҡайҙа ла ғына барма, дуҫ-иш кәрәк,
Ҡаршы сығып, атың бәйләргәү, –

тип йырлаған (“Төйәләҫ“ йырынан). “Төйәләҫ“ һүҙе урынына Дим буйҙарында йәшәүсе мендәләр – Димде, ике Инйәрҙе һыулаусы ҡатайҙар – Оло Инйәрҙе йә Кесе Инйәрҙе, әйлеләр – Әйҙе, Үҙәнде (Йүрүҙәнде), Сафакүлде һыулаусы ялан- ҡатайҙар – Сафакүлде ҡушып йырлар булған. Атыңдың башынан алдымы, ат бәйләгәсенә бәйләнеме – һин шул йорттоң ҡунағы. Саҡырылмаһаң да. Саҡырылмаған ҡунаҡ, ҡайһы бер этностарҙан айырмалы рәүештә башҡорт, татар этикаһы буйынса, Тәңре ҡунағы – иң изге ҡунаҡ. Саҡырыуһыҙ килеп, һин башҡаларға түгел, тик ошо йорттоң ҡапҡаһына боролғанһың. Тимәк, уны башҡаларҙан өҫтөн ҡуйғанһың. Шулай булғас, һин икеләтә ҡәҙерле. Саҡырылып, кем килмәй. Саҡырылмайынса ла, килә бел. Саҡырылғанды кем һыйламай, саҡырылмағанына ла һыйхөрмәт күрһәтеп ҡара. Бына ниндәй фәлсәфә ята ҡаршы сығып ат бәйләү менән саҡырылмаған ҡунаҡ булыуҙың нигеҙендә.

Үҙегеҙ ҙә күрә йөрөйһөгөҙҙөр, иғтибар итмәй үтмәйһегеҙҙер, хөрмәтле уҡыусыларым. Берәй республика, ҡала, район йә ауыл сигендә һине төрлө телдәге “Рәхим итегеҙ!“, “Хуш киләһегеҙ!“ тигән яҙыулы, йә булмаһа ҡушҡуллап, йә уң ҡулын йөрәге тәңгәленә ҡуйып, ҡулы менән тәгәс-туҫтаҡ тотҡан һын беркетелгән стела ҡаршы алыусан. Саха иленә тәү килгәндә тәүҙә “бағаналыҡ-бағана“ булып тойолған һәргә хаҡында төшөнсә алдыңмы, уларҙың саҡырып торған ана шул яҙыуҙы ла, һынды ла алмаштырыуына төшөнәһең. Һәм әлеге йырыбыҙҙың һүҙҙәрен, уның фәлсәфәүи йөкмәткеһен яңынан иҫләмәй сараң ҡалмай. Ә иҫләнеңме, һорау тыуа: “Иртәнең, көндөң, кистең, йоҡоноң хәйерле булыуын да, иҫәнлек-һаулыҡ һорашыуҙы ла “оло ағай“ теленән тура тәржемә рәүешендә ҡулланыуыбыҙ етмәгән (сөнки балалар баҡсаһы, мәктәп шулай күңелгә һеңдерә, ғәҙәткә индерә), ниңә әле ауыл, район, ҡала, республиканың сигендәге саҡырыу һүҙҙәрен дә, башҡаһын да стандартлаштырырға? Ниңә әле, ҡәрҙәштәребеҙ һымаҡ, үҙебеҙҙең телебеҙ, фольклорыбыҙ, ғәҙәт-йолаларыбыҙ, этнографиябыҙ, тарихыбыҙға нигеҙләнеп, шул саҡырыу-сәләмләү стелаларына ла милли төҫ, милли колорит бирмәҫкә лә милли йөкмәтке һалмаҫҡа?!“.

Саха илендә һерәйеп әллә ҡайҙан уҡ күренеп торған һәргәләрҙе күреп, уларҙың нимәне аңлатыуына, әлеге йырыбыҙ иҫкә төшөп, уның фәлсәфәүи асылы хаҡында тиктәҫкә генә уйланмағанмын икән дә, тиктәҫкә генә башҡорт менән саха-яҡуттың фекерләүендә оҡшашлыҡ булыуын төҫмөрләмәгән икәнмен. Сахалар ысынлап та ихлас халыҡ булып сыҡты. Һәм, улар менән башлап осрашҡанда, һәргәләрҙе тәүҙә күргәндә, күңелгә тулған, тәүҙә аңлашылып та бөтмәгән хистәр ҙә аңлайышлы тойолдо. Мәңгелек туңлыҡта йәшәгән саха ҡәрҙәштәребеҙҙең ихласлығын, күңел йылыһын тойоп, биш-алты көн эсендә бер-беребеҙ өсөн үҙ кеше булып китеүебеҙ ҙә быға сәбәпсе булғандыр. Шуға ла, беҙ ҡайтыр юлға сыҡҡанда, ап-аҡ бағанаһәргәләр хужаларының “Тағы ла килегеҙ!“ тигән һүҙен ҡабатлайҙар төҫлө тойолдо. Гүйә ки ауылдашым, мәшһүр халыҡ йырсыһы Дәүләтбай Рәхмәтуллин, исеме ил эсендә дан алған, ил тышында һан алған Айбулат тигән улының ҡурайына ҡушылып, йыр һуҙа ине:

...Ҡайҙа ла ғына барма, дуҫ-иш кәрәк,
Ҡаршы сығып атыңды бәйләргәү...

*Өфө, 2000 йылдың сентябре менән октябре.*

